# ҺӘНӘК 2

ФЕВРАЛЬ 2009

**БЫЛ ҺАНДА:**

**УТТА ЯНМАҪ ДИРЕКТОР**
7-се бит

**ЙӨҘ МЕҢЛЕК МАКАРОВ**
11-се бит




А. ВЛАДИМИРОВ

**– Кризис ваҡытында ярҙам күрһәткәне өсөн стабфондҡа рәхмәт!**
– Спасибо стабфонду за оказание помощи во время кризиса!

# Таныш булмаған егет

Ватанды һаҡлаусылар көнөнә ҡағылышлы бер ҡыҙыҡ хәлде һеҙгә лә һөйләп китәйем әле. Шулай, көндәрҙең береһендә минең малайҙы ла армия сафына алдылар. Саҡырыу пунктында бер аҙна ҡаҡланып ятҡас, уларҙы Новосибирск ҡалаһына оҙаттылар. Оҙаҡламай малайҙан ай һайын бер-ике хат килә башланы. Әсә өсөн ошонан да шатлыҡлыраҡ көн булмайҙыр ул. Сөнки “дедовщина” тигәненән, уларҙың үҙҙәренән бигерәк тә беҙ, ата-әсәләр, ҡурҡа инек. Матбуғат баҫмаларында шундай хәлдәрҙе уҡып, телевизорҙан күреп, ҡот осоп бөткән шул.

Көндәр аҡҡан һыу һымаҡ бер-бер артлы үтә, малайҙан хат килә торҙо. Уларҙа, “әсәй, әҙерәк аҡса ебәр”, тигән үтенес тә була торғайны. Әсә кеше бала



хәленә кермәй буламы: һәр хатымдың эсендә, мөмкинлегемдән сығып, күпмелер аҡса ебәрә барҙым. Бының тағы ла бер сәбәбе бар. Малайым үҙҙәренең взводында булған бер хәлде яҙғайны. Ул былай булған.

Бер ваҡыт егеттәрҙе, йоҡлап ятҡан ерҙәренән, теҙелергә ҡушалар. Шунда сафтағы бер егет баҫып торғанда ҡапыл тайып йығыла ла, нисек кенә тырышһа ла, кире тороп баҫа алмай ҙа ҡуя. Сөнки һалдаттың камуфляж ауырлығына көсө етмәй. Медиктар саҡыртып, уны носилкаға һалып, санчасҡа оҙаталар. Ауырлығын үлсәп ҡараһалар, бары ҡырҡ биш килограмм тарта икән был егет. Ике ай госпиталдә ятып, бер ни тиклем нығынғас ҡына, уға хәрби часта хеҙмәтен дауам итеү мөмкинлеге тыуа.

Ошо хәбәрҙе уҡығандан һуң малайыңа нисек аҡса ебәрмәй түҙәһең инде.

Бер саҡ малайҙың хеҙмәтен тултырып ҡайтыр көнө яҡынлашты. Ошо осорҙа үҙемдең эш урынымда бигерәк мәшәҡәттәр күбәйеп китте. Өҫтәүенә, шофёр һөнәре буйынса эшкә урынлашырға теләүсе егеттәр көн дә килә башланы. Бер көн һалдат формаһы кейгән йәш егет килеп инде. Иҫәнләшеп ишек төбөндә һүҙһеҙ торғас, мин күтәрелеп тегегә тағы бер күҙ ташланым да, башты эйеп, үҙ эшемә яңынан сумдым. Ә егет һаман урынында баҫып тора. Аптырағас, тағы тегегә күҙ һалһам, иҫ-аҡылым китте... улым армиянан ҡайтҡан! Ултырған урынымдан нисек торғанымды ла хәтерләмәйем. Вәт һин уны: әллә шаяртып баҫып торған, әллә һаман да ныҡ оялсанлығын ташламаған. Моғайын, һуңғыһылыр...

Ысынлап та, малайым танырлыҡ та түгел ине шул. Өр-яңы һалдат формаһы кейгән, яңыса сәсен алдырып ебәргән. Ике йыл эсендә буйға үҫеп, матурайып, ысын һалдат булып киткән. Ә минең өсөн ул һаман да элекке ҡиәфәтендә генә күҙ алдында ҡалған. Заман кеүек кеше лә үҙгәрә шул. Үҙгәрһен, тик яҡшы яҡҡа ғына булһын.

**Л. САЙРАНОВА.**
Өфө ҡалаһы.





## Һалдат мәҙәктәре

★★★

– Һин һалдат Иван Бровкинды күргәнең бармы?
– Нишләп күрмәйем, ти? Хатта уның менән бергә хеҙмәт иттем мин.
– Юкты һөйләмә, һуғыш бөткән йылдарҙа хеҙмәт иткән һалдат тураһындағы фильм бит ул.
– Улайһа, улы менән хеҙмәт иткәнмендер инде...

★★★

Старшина һалдаттарҙы сафҡа теҙеп алып китеп бара:
– Бер, ике... Бер, ике...
Взводка эйәреп барған бер бәләкәй малай уға өндәшә:
– Командир ағай, ә мин унға тиклем һанай беләм!..

★★★

Һалдат санинструкторға зарлана:
– Винтовка – һалдаттың иң яҡын дуҫы, тигән булалар, кисә ҡорал таҙартҡанда аяҡ бармағыма атып ебәрҙе. Шулай булғас, ул ниндәй дуҫ булһын, ти?

★★★

Командир һалдатты әрләй:
– Иптәш рядовой, мин өс тапҡыр ҡысҡырҙым, ә һеҙ иғтибар ҙа итмәнегеҙ...
– Ғәфү итегеҙ, иптәш прапорщик, мин ишетмәнем.
– Ишетмәһәгеҙ, шулай тип, килеп рапорт бирергә тейеш инегеҙ!



✦ Һәнәк бәйгеһе

# «Һеҙҙә нисек? Беҙҙә шулай...»

*Хәтерегеҙҙә булһа, бынан өс йыл самаһы элек ошондай ярыш уҙғарғайнык. Журнал уҡыусыларыбыҙ уны дәррәү күтәреп, уҙҙәрен борсоған күп кенә һорауҙарына һөҙөмтәле яуап алып ҡыуанғайны. Күңелле үткәндәргә кире ҡайтып, быйыл да шул уҡ баш аҫтында тағы бер бәйге иғлан итергә булдыҡ. Ул үҙегеҙ йәшәгән ауылдың, ҡаланың йәки күршеләрегеҙҙең күҙгә күренгән етешһеҙлектәрен, кәмселектәрен фашлауға королаcа. Былар ғына түгел, беҙҙең тирә-йүндә бөтә ғаләмде көнләштерерлек эштәр ҙә күп бит. Ана шулар хаҡында ыңғай фельетондар, йылы һүҙҙәр яҙырға ла мөмкин.*

*Конкурста ҡулына ҡәләм тотоп яҙа белгән һәр кем ҡатнаша ала. Тик бер шартты ғына күҙ уңынан ыскындырмайыҡ: яҙмаларға килтерелгән факттарҙың дөрөҫлөгө өсөн уларҙың авторҙары яуаплы. Дөрөҫлөгөгөҙҙө дәлилләп, фотоһүрәттәр ебәрһәгеҙ, тағы ла ышаныслыраҡ булыр. Йыл аҙағында бәйгелә еңеүселәргә шәп бүләктәр әҙерҙә ихтимал.*

*Беҙҙең журналға тәү тапҡыр хат яҙһағыҙ, үҙегеҙ хаҡында тулы мәғлүмәттәр (адресығыҙ, исем-шәрифтәрегеҙ, тыуған көнөгөҙ, паспорт, ИНН, пенсия буйынса социаль страховкалау номерҙары) ебәрергә онотмағыҙ.*

*Әйҙәгеҙ, яҙышайыҡ, ярышайыҡ!*

## Элеп алдым, һелкеп һалдым

**(2008 йыл, 11-се һан)**

### «Беҙҙе лә ҡайғыртһындар ине»

**Өфө ҡалаһының Затон биҫтәһендәге «Заречный» баҙарында «Алексеевка» совхозы етештергән аҙыҡ-түлектең булмауы тураһында борсолоп яҙғайны автор.**

**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары М. Ғәлиуллин беҙгә ошондай хат ебәрҙе: «Ысынлап та, микрорайонда хужалыҡтың махсус магазины юҡ, әммә баҙарҙа, «Затон» сауҙа йортонда, халыҡты совхозда үҫтерелгән йәшелсә менән тәьмин итеү буйынса автомашинанан даими сауҙа ойошторола. Әлбиттә, был ғына аҙ. Әлеге көндә биҫтәлә «Алексеевка» совхозы етештергән аҙыҡ-түлекте һатыуҙы ойоштороу мәсьәләләре ҡарала».**

### «Марракеш»

**Баш ҡалабыҙҙың төрлө ойошмаларындағы яҙыуҙарҙағы хаталар, атамаларҙағы мәғәнәһеҙ исемдәр «Һәнәк» йәбенә алынғайны.**

**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары С. Баязитов беҙгә былай тип хәбәр итте: «Фельетон буйынса етди тикшереү үткәрелде, ҡайһы бер йәмғәт туҡланыуы һәм сауҙа предприятиелары «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса ҡала терминологик комиссияһы ултырышына саҡырылды, уларға методик ярҙам күрһәтелде.**

**Был мәсьәлә 2008 йылғы эш һөҙөмтәләрен йомғаҡлау ултырышында ла ҡаралды, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү йәһәтенән ҡарар ҡабул ителде».**

# Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит НИҒМӘТИҙең тыуыуына – 100 йыл



Рәшит Ниғмәти (1909 – 1959) хәҙерге Һамар өлкәһе Оло Черниговка районы Диңгеҙбай ауылында донъяға килә. Йәшләй етем ҡалып, балалар йортонда тәрбиәләнә. 1924 йылда Өфөгә килеп, В. И. Ленин исемендәге балалар мәктәбенә уҡырға инә. 1931 йылда Өфө рабфагын тамамлағас, Туймазы районы гәзите хеҙмәткәре вазифаһын башҡара. 1934 – 1936 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә. Ҡайтҡас, республика гәзиттәрендә, Башҡортостан Яҙыусылар союзында эшләй.

1933 йылда уның “Кереш” тигән тәүге шиғырҙар китабы сыға. Шул йылда баҫылған “Баҫыу хөкөмө” поэмаһы менән үҙен өлгөргән шағир итеп таныта. Ә инде Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Р. Ниғмәти ижады яңы баҫҡысҡа күтәрелә. Уның “Әсә һүҙе”, “Үс ал, патриот!” шиғырҙары, “Үлтер, улым, фашисты!”, “Һинең кәләшеңдең хаттары” поэмалары тылда ла, һалдаттар араһында ла ҙур ҡаҙаныш яулай.

Һуғыштан һуң Р.Ниғмәти “Большевик”, “Оҫҡондан – ялҡын”, “Һаҡмар ҡыҙы” поэмаларын ижад итте. Шағирҙың бер нисә сәхнә әҫәре Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә ҡуйылды.

Р. Ниғмәти заманы, уның сәйәсәте, мәҙәниәте менән бер сафта атланы, тормоштағы, йәмғиәттәге тиҫкәре күренештәрҙе ситләп уҙманы: төрлө ҡарарҙар сығарыу менән генә мауығыусыларҙы, үҙе әйткәнсә, “күҙгә күренергә теләүселәрҙе” тәнҡитләүҙән дә ҡурҡманы. Уның сатира ҡәләме һәр саҡ уяу булды, был жанрҙың көсөн шағир кәрәкле “сәпкә” йүнәлтә белде.

## Юл теләгә

Бала саҡта уҡ ҡулыма
Ҡорал алыу кәрәк булды.
Ҡулыма алған тәүге ҡорал
Һәләк осло һәнәк булды.
Һәнәк тотоп бик күп төрлө
Эш эшләргә өйрәндем мин.
Эшләп арығас, шул һәнәктең
Үҙенә үк һөйәлдем мин.
Эҫе йәйҙә көн дә янып,
Һәнәк тотоп кәбән ҡойҙом,
Таҡыр түбә ырҙындарҙа
Көлтәләрҙән эҫкерт өйҙөм.
Һыуыҡ ҡышта меңрәй торған
Һыйырға мин бесән һалдым,
Сана төбөнә һәнәк һалып,
Яланға һаламға барҙым.
Тиреҫ-тиҙәк, сүп-сарҙы мин
Ошо һәнәк менән түктем.
... Киттем ситкә.
һәнәгемде
Өй алдыма һөйәп киттем.
Йылдар үтте...
Бына тағы
Осраштыҡ беҙ йылдар үткәс.
Мин ҡартая бирҙем, ләкин
Йәп-йәш көйө “һәнәк” иптәш.
Хәҙер ҡыш. Ерҙе ҡаплаған
Алпаҡ ҡарҙар юрған булып.
Алға баҫты һәнәгем, тик
һәнәк түгел, журнал булып.
Бар әле тормошта беҙҙең
Көлкөгә алырлыҡ нәмә,
Тап ҡалаҡ һөйәктәренә
Ауҙарып һалырлыҡ нәмә.
Йәшәп беҙҙең арабыҙҙа
Һәм ултырып санабыҙға,
Үҙ йырҙарын йырлай-йырлай,
Беҙҙең менән бара бергә:
Консерватор,
бюрократтар,
спекулянттар
һәм ҡараҡтар,
хулигандар,
эскеселәр,
ялҡауҙар,
ғәмһеҙ кешеләр,
карьеристар
һәм ҡомһоҙҙар,
просто вайымһыҙ –
моңһоҙҙар.



Бар әле тормошта беҙҙең
Сүплеккә түгерлек нәмә,
Ыҫҡына алмаҫлыҡ итеп,
“Һәнәк”кә элерлек нәмә.
Шулар менән аяу белмәй,
Һин көрәште башла, “һәнәк”.
Ҡайҙа күрһәң дә, уларҙы
Сырылдатып фашла, “һәнәк”.
Сәнскелә сәсән һүҙ менән
Һин шул яман атлыларҙы,
Юлда таш булып ятыусы
Йүнһеҙҙәрҙе, шаҡшыларҙы.
Оҙон да, ауыр ҙа юлдан
Беҙ барырбыҙ бергә-бергә.
Беҙҙең бурыс уртаҡ, иптәш:
Көрәшергә һәм еңергә!

*1953.*

## Елле ҡарар

*Ҡайһы бер етәкселәр төрлө ҡарарҙар сығарыу менән мауығалар, ләкин уларҙың үтәлешен тикшермәйҙәр.*

I

Кабинет тәҙрәһе асыҡ,
Кабинет өҫкө ҡатта.
Күңелдә рәхәт тыныслыҡ,
Һәм тынлыҡ тирә-яҡта.
Хөрмәтле Сафин Сөләймән
Тәҙрәнән тышҡа ҡарай.
Бер нәмә боҙмай тынлыҡты,
Тик сәғәт секунд һанай.
Тышта, ҡояшта йылтырап,
Оса үрмәксе ауы;
Бәпкәләрен алып сыға
Сторожиханың ҡаҙы.
Тик бер аҙ арыған төҫлө
Күренә Сафин иптәш.
Арырһың, төн буйы барған
Ултырыш унда бөткәс.
Уның ҡарауы, ҡарарҙың
Яҙылды төндә шәбе.



Ҡарарҙың, решениеларҙың
Нығ белә Сафин тәмен.
Шуға шул, йонсоу булһа ла,
Шат бөгөн Сафин иптәш:
– Ходҡа китер хәҙер эштәр,
Шәп ҡарар ҡабул иткәс.
... Кабинет тәҙрәһе аша
Ул тышҡа ҡарап тора.
Тирә-яҡ тын. Аҡрын ғына
Үрмәксе ауы уҙа.
Ҡапыл,
телефон шылтырап,
Ҡапыл саҡырҙы уны.
Һәм ҡапыл трубканы алды
Сафин иптәштең ҡулы...
Өфөнән ине был хәбәр...
... Тап ике сәғәт үткәс,
Тәүге осраған поезға
Ултырҙы Сафин иптәш.

II

Өфөгә бара бөгөн ул,
Ул отчёт менән бара.
Поезд тәҙрәһендә талдар
Үрелеп ҡарап ҡала.
Кәйеф шәп, күңел көрәйә
Яҡынайған һайын ара:
Йәнәһе, отчётым елле,
Ну-ка, бәйләнеп ҡара!
Ҡайҙа өҙөклөк күренһә,
Шунда мин күрҙем сара.
Ышанмаһаң, бына папка,
Ҡарарҙар һанын һана.
Ысынлап та, эштәрҙең ул
Иң ваҡтарын да күргән,
Күргән дә бары турында
Ҡарар сығара белгән.
Мәсәлән, колхоз ауылында
Сыҡмаһын өсөн пожар,
Алтмыш каланча һалырға
Яҙылды елле ҡарар.
Туңмаһын өсөн малдар,
Мең тонна силос һалырға
Ҡылынды ҡәтғи ҡарар.
Конкрет ҡарар бирелде
Ҡаҙырға илле ҡоҙоҡ.
(Ҡоҙоҡ эшендә киттек беҙ
Күрше районды уҙып.)
Һәм парикмахер хаҡында
Йәйелдерелде ҡарар.
Шундай уҡ шәп,
киң ҡарарҙан
Мәхрүм ҡалманы баҙар.
Ҡайһы ғына эште алма,
Ул эш хаҡында – ҡарар.
Эй ҡарар, ҡәтғи ҡарар,
Етди ҡарар, елле ҡарар!

III

Ваҡ эшме былар? Юҡ, түгел,
Улар бары ла кәрәк.
Тик улар ҡағыҙҙа ҡалһа,
Шул итә эште һәләк.
Әйтелгән силос башняһы
Ҡоролмай тороп ҡалды,
Пожарник ҡорор каланча
Һалынмаҫ борон ауҙы.
Һыуы сыҡмаған ҡоҙоҡтар
Емерелеп ятып ҡалды...
Тик яткан ҡарарҙың өҫтөн
Саң-туҙан һырып алды.
Ясленәр асыуҙы һорап,
Әсәләр даулап килгәс:
– Ҡарар бар, ни етмәгән?.. – тип
Таң ҡалды Сафин иптәш.
Әйттеләр: “Ҡарар эсенә
Балалар һыймай беҙҙең,
Ҡарарың йәйенке булһа,
Ин дә йәшәй бир үҙең”.
Йәштәр өсөн танцевальный
Зал кәрәк, иптәш, тигәс:
– Ҡарар бар, ни етмәгән?.. – тип
Таң ҡалды Сафин иптәш.
Әйттеләр: “Булмай бит, иптәш,
Ҡарар эсендә бейеп.
Ярамай бит инде бейеү
Ҡарар өҫтөнә менеп”.
... Ләкин Сафиндың кәйеф шәп:
Ул отчёт менән бара.
Уйында бер генә нәмә:
– Ну-ка, бәйләнеп ҡара!

IV

Өс көндән ул ҡайтып килде,
Һаҡал-мыйыҡтар үҫкән.
Күрәбеҙ: Сафин иптәштең
Кикриге аҫҡа төшкән.
Отчёт тыңлағас, Өфөлә
Яҙылған һуңғы ҡарар –
Эшлекһеҙ Сафин турында
Һуңғы һәм елле ҡарар.

*1953.*

С. КИЯШКО



Р. ЮНЫСОВ



# Шартлы күренеш

“Кеше хәлен кеше белмәй үҙ башына төшмәһә”, – тип бик хаҡ әйткән боронғолар. Беҙ, мәҫәлән, әҙәм балаһы, һәр ваҡыт бәхетле, шат булып тормай, улар шартлы күренеш тигәндәренә бығаса әллә ни иғтибар бирмәй инек. Баҡтиһәң....

Башҡа ауылдар өйҙәрен рәхәтләнеп газ менән йылытыуы тураһында ишетһәк, көнләшеүҙән шартларҙай була торғайныҡ. «Вәт бәхетле әҙәмдәр, беҙҙең кеүек йәй буйына ахмаллаға ҡалып, утын әҙерләп толланмайҙар. Иртән торһаң йылы, кис ятһаң йылы». Тиҙҙән беҙҙең Озёрный ауылына газ торбалары һуҙа башлағас, ҡыуанысыбыҙҙың сиге юҡ ине.

– Прощай, мейес! Хәҙер бөтә донъяны ҡара төтөнгә ыҫлай-ыҫлай, тонсоға-тонсоға мейес яғып хитланаһы юҡ.

– Һөйәгебеҙ йылыға ирей икән.

– Рәхмәт инде хужаларыбыҙға.

Әммә иртәрәк ҡыуанғанбыҙ икән. Газ торбаларын һуҙып бөттөләр ҙә, эште шуның менән тоҙланылар. Был турала хужа тейешле кешеләрҙән һораһаҡ:



– Күбенә түҙгәс, аҙына ғына сабыр итегеҙ инде, күп эш ҡалманы, – тип йыуаттылар.

Ҡасан газ була, тип сабыулай торғас, йылыға тамам туйындыҡ. Хатта эҫе була башланы. Хәҙер һуҙылған торбаларҙың кәрәге лә ҡалманы типтер инде, оҙон ҡуллы ағайҙар уларҙы үҙ яғына шылдыра башланы.

Бына шулай шатлығыбыҙ ҡыҫҡа ғүмерле булды. Шартлы төшөнсә тигәндәре ошолор, моғайын.

**В. ҠАРАНОВ.**
Учалы районы.





**С. КАШАПОВА, А. САЙРАНОВ, Р. ЮНЫСОВ һүрәттәре.**






*Шулай ҙа була*

# Утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ

Ул кабинетына инеп ултырҙы ла айырыуса күтәренке кәйеф менән креслоһында зыр әйләнеп алды. Шатланмаҫлыҡмы ни? Яҡын туғаны ҡала хакимиәте башлығы булып килгәс, йәнең теләгән мәктәпте һайла, тине. Ул бер ҙә икеләнмәйенсә төшөмләрәгенә туҡталды. Бөгөн шуға ҡәнәғәт. Үҙенә үҙе һоҡланыу шауҡымында һуңғы ҡыңғырау тантанаһында һөйләйәсәк телмәрен әҙерләй башланы. Ултырғыстан тормайынса ғына секретарға:

– Миңә бүләккә әҙерләнгән сәскәләр иң күркәме һәм ҡиммәтлеһе булһын, – тип бойорҙо.

Тегеһе ҡушылған йомошто үтәргә ашыҡты. Шулай бер ҙә тартынмайынса үҙ файҙаһына эшләрлек тәүәккәллеге бар директорҙың. Быға күнегеп тә бөткәндәр. Бер нисә көн элек хушлашыу кисәһен ойоштороусылар менән бергә магазинға барып, ете меңлек кеҫә телефоны алдыртҡайны. Уҡыусыларҙан да мәктәпкә аласаҡ бүләктәрҙең затлы булыуын талап итә.

Фәрит ағай менән Зәйнәп апай ҙа тантанаға килгән. Улдары мәктәпте тамамлай бит. Байрам өҫтәле әҙерләүгә лә улар яуаплы. Өҫтәл балмайҙан, ҡымыҙҙан, ҡазылыҡтарҙан, ит-бәлештәрҙән һығыла. Хатта сәйе лә, мәйе лә юҡ түгел.

Сығарылыш кисәһе йырмоңға үрелеп барҙы. Бер-береһен тулыландырған матур-матур фекерҙәр яңғыраны. Директорҙың әхләҡи ҡиммәттәргә ҡоролған ҡотлау һүҙҙәре хатта туң йөрәктәрҙе иретерлек булып ҡунаҡланы йәштәрҙең күңеленә.

Шул саҡ ҡатын иренә:

– Ҡыҙыбыҙҙы урынлаштырыу тураһында һөйләшеп ҡарайыҡ, йомошобоҙ кәмей торор ине, – тине.

Зәйнәп апай, бүлмә ишеген ҡыйыуһыҙ ғына асып, рөхсәт һораны ла баҙап ҡалды. Директорҙың бер ҡулында – телефон, икесеһендә – тәмәке. Әйтерһең дә, креслола әле генә матур һүҙҙәр һөйләгән етәксе түгел, урамдан килеп ингән шапшыҡ бисә ултыра ине. Йөҙөндә бер ниндәй ҙә шәфҡәтлелек, мәрхәмәтлелек күренмәй. Тик муйынына ҡат-ҡат уралған алтын сылбыр ғына ҡояшта ялт-йолт уйнай. Затлы күлдәгендә теҙелгән төймәләренең өҫкө өлөшө ысҡындырылған, асыҡ тәҙрәнән иҫкән елдән иҙеүе асылып, яланғас тәне күренеп-күренеп ҡала.

– Ғәфү итегеҙ, ваҡытһыҙ килдем, шикелле. Яңы уҡыу йылына алтынсы синыфҡа ҡыҙыбыҙҙы алып килергә ниәтләнәбеҙ, – тине Зәйнәп.

Директор, хужаларса аҫтыртын йылмайып, аҫҡа ҡарап уйланды ла үтә тыныс тауыш менән:

– Әлегә урын юҡ, – тине. – Әгәр Красноусол шифаханаһына ике кешелек путёвка тапһағыҙ, һорауығыҙ һис шикһеҙ үтәләр. Тик июль урталарына өлгөртөгөҙ.

Ауыр тәьҫир итте Зәйнәпкә кәтғи яуап. Йөрәген киҫтеләрме ни! Бер аҙ тынысланғас, кисә тамамланыуын да көтөп тормайынса, ҡайтыр юлға сыҡтылар.

Директорҙың оятһыҙлығы, ата-әсәләрҙән бер туҡтауһыҙ әле быныһын, әле тегенеһен теләнселәүе аптыратты уларҙы. Вазифаһын үҙ мәнфәғәтендә файҙаланыусы оҫтарҙы, тәжрибә тупланы. Ете йыл дауамында йыйылған аҡса ҡайҙа осто икән? Иң тәүҙә меңәрлектәрҙе сығарып һалмайынса сабыйыңды уҡырға алмайҙар бында. Ә бит йылына 140 – 150 бала ҡабул ителә.

Күптән түгел әрһеҙ етәксене йәнә мәктәп директоры итеп тәғәйенләнеләр. Булһа була бит утта янмаған, һыуҙа батмаған кешеләр…

**Таңсулпан ШӘҺӘРОВА.**
Сибай ҡалаһы.



# Ҡайҙа беҙҙең ЕТӘКСЕ?

**Марат КӘРИМОВ**

**Хикәйә**

“Ике ҡатын бергә килһә – баҙар, ә өс ҡатын йыйылһа – йәрминкә”, – тиҙәр. Ә бына өс ауыл ҡартының осрашып һөйләшкәнен ни тип атар инегеҙ? Миңсә, ул баҙар ҙа, йәрминкә лә түгел, – сход. Ауыл сходы. Элеккесә әйтһәк, йыйын. Ҡатын-ҡыҙҙар баҙарҙа, йәрминкәлә ни тураһында һөйләшәләр, әйтә алмайым, ә бына сходта, үҙегеҙ беләһегеҙ, юҡ-бар тураһында һүҙ алып бармайҙар, унда етди хәл-ваҡиғалар, ауыл халҡын борсоған көнүҙәк мәсьәләләр ҡарала. Беҙ һүҙ алып барасаҡ ауыл өсөн ундай мәсьәләләрҙең иң елеккә тейгәне – етәкселек.

Шулай булмай тағы! Элек колхоз тип йөрөтөлгән, тик хәҙер ниндәйҙер, әллә ООО, әллә УУУ тип, әллә АУАУ тип аталған хужалыкта етәкселәр алышынмаған йыл юҡтыр. Һәр берәһе эште ҡалала үҙенә коттедж төҙөүҙән башлап ебәрә лә, ул төҙөлөп бөткәс, тиҙерәк шылыу яғын ҡарай. Ә һуңғыһы барыһынан да арттырҙы: рентабелле түгел, тип мал фермаһын бөтөрҙө. Ремонтҡа аҡса юҡ, тип техниканы ситтән килгән ҡыпһыуырҙарға һатып ебәрҙе. Ә күптән түгел хужалыҡтың иң ундырышлы ерҙәрен көньяҡтан килгән эшҡыуарҙарға киҫеп бирҙе. Йәнәһе лә бөгөнгө баҙар экономикаһы шуны талап итә. Электән дә колхоз милкен урлашыу бар ине. Ә хәҙер ошо ғәҙәт тағы ла көсәйҙе. Колхоз үҙебеҙҙеке, тиҙәр ҙә ҡулдарына нәмә эләгә, шуны өйҙәренә ташыйҙар. Юғарылағыларҙан үрнәк алалар, шилмалар. Бына шулай итә торғас, элекке көр колхоздан бары тик һөлдә генә ҡалды.

Бына шул хаҡта һөйләшеп ҡайтып киләләр ине мәсеттәге йома намаҙынан әлегә ревматизмлы аяҡтары йөрөгән ауылдың өс мөхтәрәм ҡарты – Хужахмәт, Минәхмәт һәм Муллахмәт.

– Дә-ә, – тип һуҙҙы Хужахмәт, элекке мастерскойҙың ватыҡ тәҙрәләренә күҙ йүгертеп. – Эштәр артабан да шулай барһа, бөтөнләй бөләбеҙ бит.

– Артыҡ бөләһе ҡалмаған инде, сигенә еткәнбеҙ, – тине өмөтһеҙләккә тамам бирелгән Минәхмәт. – Берәй ҡаты ҡуллы, ғәҙел етәксе килмәй тороп, ҡабат аяҡҡа баҫа алмабыҙ, ахырыһы. Тик ундай етәксене ҡайҙан табаһың? Килгән береһен рәтле кеше тип уйлайһың, ә ул жулик булып сыға. Шулай күпме ауыҙыбыҙ беште инде. Етәксене үҙебеҙҙең яҡтан түгел, ситтән эҙләргә кәрәктер. Намыҫын юғалтмаған кешеләр барҙыр бит инде был илдә... Тик уларҙы ҡайҙан беләһең?

– Ә мин ундай етәксене беләм, – тине эстән уйланып, былға тиклем өндәшмәй генә атлаған Муллахмәт. – Беҙҙең колхозға самай рас булыр, тиеүем.

– Йә, йә? – уның ҡорҙаштары күҙгә күренеп, йәнләнеп киттеләр.

– Әлеге президентыбыҙҙы әйтеүем, – тине Муллахмәт. – Оҙаҡламай уның ил башында ултырыуының икенсе срогы тамамлана. Эштән бушай. Әллә, мин әйтәм, эшһеҙ ятҡансы...

– Дөрөҫ әйтәһең, ҡорҙаш. Булдырһа, ул ғына булдыра ала инде.

Хужахмәт менән Минәхмәт аҙымдарын ҡыҙыулата төштөләр.

– Эйе, ҡаты ҡуллы ул, һүҙ ҙә юҡ. Һөйләшеүенән генә ҡара һин, “мочить будем в сортире” тип кенә ебәрә. Беҙҙең халыҡты шунһыҙ тыңлатып ҡара һин!

– Уныһы шулай, – тип уфтанып алды Муллахмәт. – Тик шигем бар бит әле. Беҙҙең колхозға етәксе булып килергә ризалығын бирерме икән?

– Хәлебеҙҙе ентекләп аңлатып хат яҙып ебәрһәк, – тине Хужахмәт.

– Ауыл карттары үтенеп һорай, тип тә өҫтәһәк, нужәли ҙә хәлебеҙгә кермәҫ икән? – тигән ышаныс белдерҙе Минәхмәт.

– Күҙ терәп торған кешебеҙ һин генә, – тип тә ҡуйһаҡ, – тип йәнә өҫтәмә индерҙе Хужахмәт.

Ҡарттар кәтғи ҡарарға килделәр:

– Яҙабыҙ тигәс, яҙабыҙ инде уны! Тик ҡайһыбыҙ яҙыр икән? Ни тиһәң дә, үтә лә яуаплы хат бит. Күрше ауыл Степанына түгел.

– Муллахмәт ҡорҙаш, һиңә йөкмәтәйек был эште, – тине Хужахмәт. – Арабыҙҙа иң аҡыллыһы һин. “Ил башын үҙебеҙгә саҡыртайыҡ”, – тип тә һин тәҡдим иттең.

Муллахмәт еңелсә генә ҡаршылашыуҙы кәрәк тапты:

– Улайға китһә, һин дә дурак түгел. Иншалла.

Иң төплө дәлил Минәхмәттеке булып сыҡты:

– Риза бул да ҡуй, ҡорҙаш. Һинең почерк һәйбәт. Уҡығанда матур яҙыу дәресенән гел “бишле” ала торған инең. Ә Хужахмәт менән минең почерк таралҡан йөрөгән һымаҡ. Ҡай саҡ үҙем яҙғанды үҙем дә таный алмайым. Балалар уҡып бирә.

Шулай тигәс, риза булды Муллахмәт, ҡайҙа барһын.

– Ярар, улайһа. Аллаға тапшырҙыҡ. Тик бер үтенесем бар: ҡултамғағыҙ таралҡан йөрөгән кеүек булмаһын ыштубы, уҡырлыҡ булһын. Кемдәр яҙғанын белһен ил башы. Риза булып килгәс, иң беренсе беҙҙе саҡыртып алып, рәхмәт әйтеп ҡулдарҙы ҡыҫасаҡ бит ул. Күңелем һиҙә.

– Улайға китһә, тырышырбыҙ, – тип вәғәҙә бирҙеләр ҡорҙаштары.

Икенсе аҙнала мәсет юлында улар тағы осраштылар.

– Йә, теге хат нишләй?

Муллахмәт кеҫәһенән дүрткә бөкләнгән дәфтәр ҡағыҙы килтереп сығарҙы.

– “Һеҙҙең килеүегеҙҙе зар-интизар булып көтәбеҙ”, – тигән һүҙҙәрҙән һуң ҡултамғағыҙҙы ҡуйығыҙ.

Хатты өсәүләп барып, почта йәшнигенә һалдылар.

Хат китеүен китте, әммә бер нисә көндән ҡарттар күңелһеҙ хәбәр ишеттеләр: президент премьер-министр булырға ризалығын биргән икән.

– Эх, хат барып етмәгән! Барып етһә, премьер-министрлыҡҡа түгел, мотлаҡ беҙгә килергә ризалығын биргән булыр ине, – тип көйөндөләр ҡарттар. – Хатты иртәрәк яҙырға башыбыҙға килмәгән шул.

Шулай ҡайғыға бирелеп торғанда, Муллахмәт ҡапыл ғына һорап ҡуйҙы:

– Премьер-министр булып күпме ултыралар әле?

– Дүрт йыл. Быны менән ни әйтергә теләйһең?

– Срогы тулыр алдынан беҙгә килеүен һорап тағы хат һалһаҡ, тиеүем.

– Ауыҙыңа бал да май! Бик аҡыллы фекер был! – тине Минәхмәт.

– Әйттем бит, арабыҙҙа иң аҡыллыһы һин тип, – тине Хужахмәт.

– Тик был юлы хатты иртәрәк һалырға онотмайыҡ, – тип өҫтәне Минәхмәт. – Йә яңынан президент булырға ризалығын биреп өлгөрөр, белмәҫһең.

Ҡарттар дүрт йылдан һуң тағы хат яҙырға һөйләшеп, таралыша башлағайнылар ҙа, уларҙы Муллахмәт туҡтатты:

– Ашыҡмағыҙ әле, хәл ителмәгән тағы бер мәсьәлә ҡалған.

Ҡорҙаштары туҡтап ҡалды:

– Ниндәй мәсьәлә тағы?

– Сход йыйып, ул хатты шунда ҡабул итһәк, уның тәьҫире көслөрәк булыр кеүек.

Сход һүҙен ишетеүе булды, Хужахмәт сәпсене лә китте:

– Тағы нимә уйлап сығараһың? Аҡыллы тигәс тә. Мин бит уны күңелең булһын өсөн генә әйткәйнем. Һин, бер ҡатлы, шуға ышанған булдыңмы? Сход йыйып, нимә ҡырғаныбыҙ бар? Ул бит начальство ҡушыуы буйынса ғына йыйыла. Әә түрәләр беҙҙең ҡулға ла, ауыҙға ла һуғасаҡтар, мин әйтте тиерһең. Быны күр ҙә тор.

Муллахмәттең кәйефе боҙолғанын күреп, Минәхмәт ҡорҙашының тупаҫлығын йомшартырға ашыҡты:

– Өс ҡарт осрашып һөйләшһә, шул сход була тип әйтәләр ҙә баһа. Сход шул үҙебеҙ булабыҙ бит инде. Түрәләргә әйтеп тормабыҙ. Сход исеменән, тип яҙырбыҙ ҙа ҡуйырбыҙ. Уның нимәһе бар инде. Ғүмер буйы халыҡ исеменән һөйләнеләр, “халыҡ һорай”, тип юғарыла күпме ҡарарҙар ҡабул иттеләр. Халыҡтан кем һорап торһон? Беҙ ҙә, ауыл халҡы һорауы буйынса, тип яҙһаҡ, уны кем тикшерә?

– Уныһы шулай инде, – тине Муллахмәт, Минәхмәттең һүҙҙәре менән килешеп.

Төшкән кәйеф яңынан күтәрелде. Шул күтәренке кәйеф менән ҡорҙаштар мәсеткә ҡарай ыңғайланылар. Ахшам намаҙы ваҡыты етеп килә ине...

**– Уның персональ машинаһын тартып алғандар, ти.**

– Говорят, у него персональную машину отобрали.



А. СЕВАСТЬЯНОВ

А. АНДРЕЕВ



# ОҪТА

**Юмореска**

Телгә лә, ҡул эшенә лә, тамаҡ төбөн сылатырға ла маһир Гәрәйша ағай. Бына әле ул үҙенең өс-дүрт дуҫы менән Алмалы ауылында оҫталыҡ эше менән мәшғүл. Басир ағайҙың өйөн күтәреп, башын ябып бирәсәктәр. Хаҡын һөйләшеп килешкәс, изге эш алдынан тип, хужа егеттәрҙе әҙерәк һыйлап алды.

Ауылда “тел биҫтәһе” ҡушаматын йөрөткән Гәрәйшаның, ике-өс рюмка кәккәндән һуң, теле тағы ла нығыраҡ асыла башланы.

– Әллә, мин әйтәм, туған, булғас-булғас, өйөңдө мансардалы итеп эшләйекме? – тип һүҙ башланы ул. – Балконын да ҡуйып ебәрһәк, ниндәй зәһәр килеп сығасаҡ. Биллаһи, ауылда беренсе өй буласаҡ. Йәйге сәлләлә балконға сығып, тирә-яҡҡа ҡарай-ҡарай тәмәке көйрәтеүе үҙе бер кинәнес бит. Йәки бына, әле беҙ ултырған кеүек, иң ҡәҙерле ҡунағың менән сәкәштерә-сәкәштерә йөҙ грамм һуғыуы.

Басир ағай көтөлмәгән тәҡдимгә шатланып китте. Ҡара әле, нишләп бығаса башына килмәгән? Тик егеттәрҙең ҡулынан килерме һуң?

– Юҡҡа борсолаһың, ағай. Беҙҙең ише бөркөттәргә эш сыҙаймы! Ауылда үҙемдең йорт та нәк шундай. Бөтәһен дә үҙем эшләнем, – тине Гәрәйша, көрәк кеүек ҡулдарын күрһәтеп...

Шаҡ-шоҡ, шарт-шорт! Бысҡы сыңы, балта тауышы тынмай. Оҫталар эште емертеп алып бара. Ә инде бер аҙҙан ауыл уртаһында ҡурсаҡ кеүек йорт пәйҙә булды. Семәрле кәрниздәре, тәҙрә йөҙлөктәре һуң! Әйтерһең, быларҙы ябай әҙәм ҡулы түгел, ә фәрештә үҙе ҡойоп киткән.

Егеттәрҙең даны күрше-тирә ауылдарға ла таралды. Бындай оҫталар юлда тәгәрәп ятмай. Уңайы тура килгәндә файҙаланып ҡалырға кәрәк. Берәүҙәре уларға йорт эшләп биреүен үтенде, икенселәре адрестарын алып ҡалырға ашыҡты...

Көҙөн Басир ағайҙың өлкән улы кәләш алып ҡайтты.

– Килен Ҡарайылға ауылынан тип әйтәһең инде? Беҙҙең өйҙө эшләгән Гәрәйша оҫта ла шул ауылдан бит, – тине Басир ағай ҡыуанысынан.

Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарын туйға саҡырырға барғас, ул Гәрәйша оҫтаның да хәлен барып белмәк булды. Тап үҙенеке кеүек матур йортто күрергә ниәтләнгән Басир ағай иҫке генә өй янында туҡтап ҡалды. Тәҙрә рамдарының буяуҙары ҡубып, ҡояшта уңып бөткән. “Яңылыштым, ахырыһы,” – тип Басир ағай кире боролорға торғанда, бер яғы ойоҡ менән бәйләп ҡуйылған ҡапҡанан һуҡмыш Гәрәйшаның башы күренде.

**Венер ИСХАҠОВ.**



А. ЛЕВИТИН



А. САЙРАНОВ

Әхәт НИҒМӘТУЛЛИН

## Ялағай

*Бер ниндәй мәгънә юк*
*Йөрөүҙең елеп кенә.*
*Ундайға минең кеүектәр*
*Ҡарайҙар көлөп кенә.*

*Кемдәр нисек ҡылғанды*
*Аламын элеп кенә;*
*Мин кәрәген үҙләштерҙем,*
*Файҙаһын белеп кенә.*

*Кем түрәгә зарар эшләй –*
*Ебәрәм сөйөп кенә,*
*Еңелгәндәр һүҙ һөйләмәй,*
*Сәсә гел күбек кенә.*

*Кинәнеп йәшәргә була*
*Ниҙер сәлдереп кенә.*
*Тотолһам, түрәм ҡотҡарҙы,*
*Төтөн әрҙәрөп кенә.*

*Түрәмдең йән дуҫы булдым,*
*Күңелен күреп кенә;*
*Ни ҡушһа, шуны үтәнем,*
*Елдәй елдереп кенә.*

*Бер йылдан түбәнгә баҡтым*
*Һәм ҡараным үрҙәргә:*
*Түрәм ярҙамсыһы булып*
*Ваҡыт еткән урҙәргә.*

*Ошо хаҡта әйттем уға,*
*Алдында бейеп кенә.*
*Ул мине төрмәгә тыҡты,*
*Арҡамдан һөйөп кенә.*

## Һәнәк йәбенә

# ЮҒАЛҒАН “МАКАРОВ”

Урамдарҙа бағана һайын ҡағыҙ йәбештерелгән. Берәһе өҫтөнә икенсеһе. Мин бығаса уларға иғтибар бирмәй ныҡ хаталанғанмын икән. Бер көн ҡараһаммы! Ҙур ҡағыҙға бик-бик фәһемле һүҙҙәр яҙылғанына тап булып, үҙемдең ғәмһеҙлегемә үкенә биреп ҡуйҙым. “Алйот, – тим, үҙемде әрләп, – кешеләр отошло эш, файҙалы шөғөл, табышлы юл тәҡдим итә, ә һин һанға һуҡмаған булып ҡыланаһың”.

> **ВНИМАНИЕ!**
> **ОХРАННЫМ ПРЕДПРИЯТИЕМ УТЕРЯН ПИСТОЛЕТ МАКАРОВА.**
> **НАШЕДШЕМУ, А ТАКЖЕ ЗА ПРЕДОСТАВЛЕНИЕ ИНФОРМАЦИИ О МЕСТОНАХОЖДЕНИИ ГАРАНТИРУЕТСЯ ВОЗНАГРАЖДЕНИЕ 100000 РУБЛЕЙ**
> **КОНФИДЕНЦИАЛЬНОСТЬ БУДЕТ ОБЕСПЕЧЕНА**
> **Обращаться по телефону:**
> **264-86-90(с 9.00 до 18.00 )**
> **242-77-35(круглосуточно)**

Ысынлап та, шаҡ ҡатырлыҡ хәбәрҙәр бар икән! Бер изге ниәтлеһе, мәсәлән, бер юлы эш урыны һәм фатир тәҡдим итә. Икенсеһе – тәүге осрашыуҙа уҡ ус тулы аҡса. Илле мең вәғәҙә итә, билләһи. Һин уға шылтыратып килеп етеүеңә сығара ла һала. Хатта сәй, кофе эсереп, һыйлап, рәхмәттәр әйтеп оҙата. Тик...

Ана шул “тик” уйға һала ла инде. Ҡағыҙ йәбештереүсегә... уның пистолетын ҡайтарып бирергә тейешмен. Ниндәй пистолетмы? Уныһы ла аныҡ әйтелгән. “Макаров” маркалы. Ҡара әле, нишләп ул кеше пистолет тағып йөрөй икән? Әһә, белдем: һаҡлау предприятиеһы. Атаҡ-атаҡ, нимә булды һуң әле? Үҙҙәре кеше милкен һаҡлауға лицензия алған, ә үҙҙәре... ҡулындағы пистолетты ла тота белмәй. Урамда барғандамы, әллә транспорттамы төшөрөп ҡалдырған инде.

Уйланып йөрөй торғас, пистолет эҙләргә саҡырыусы белдереүҙәргә бағана һайын тиерлек осрата башланым. Хәҙер илле мең түгел, йөҙ мең һум вәғәҙә итәләр. Вәт, ниндәй отошло эш бар икән! Башта шул уй ғына. Бағаналарға йәбештерелгән ҡағыҙҙарға ҡарар ваҡытым ҡалманы. Аяҡ аҫтында пистолет ятмаймы икән, тип өмөтләнәм. Кемдәрҙеңдер кеҫәһендә түгелме икән тип, рентген үткерлеге менән үтәләй күрергә тырышам. Йөҙ мең һум минең өлөшкә төшкән көмөш һымаҡ тойолғанда нисек башҡа эшкә ваҡыт сарыф итеп торайым? Хатта төн йоҡоларым бүленә, һаташам икән. Таң атыр-атмаҫтан сығып китәм дә ҡала урамдарын бер итеп ҡыҙырам.

Йөҙ мең аҙ аҡса түгел дә инде. Ҡайҙалыр аяҡ аҫтында ятҡан “Макаров”ты табаһы ғына ҡалды.

**Фәрит ВАХИТОВ.**



# Ағайым хаттары – һалдат аманаттары



Ҡатмарлы, бәрелешле, ығы-зығылы, шау-шыулы заманда йәшәйбеҙ. Тартыштар, тауыштар оҙаҡҡа һуҙылһа, халыҡтар яҙмышын, киләсәген хәл иткән иң изге һәм мөҡәддәс хәл-ваҡиғалар ҙа тоҫһоҙләнә, хатта онотола башлай. Бөйөк Ватан һуғышы, халыҡ ҡаһарманлығы, миллиондар ҡаны менән яуланған Еңеү йылдың бер көнлөк хәтирәһе һәм тантанаһы ғына булып ҡуймағайы. Ә бындай хәүефкә урын бар. Бер нисә йылдар үтеүгә был алыштың тере шаһиттарын бармаҡ менән һанап сығып буласаҡ. Ана шуға ла ятып ҡалған ҡаһармандарҙың хаттарын, иҫән ҡайтҡан ветерандарҙың иҫтәлектәрен һәр быуын кешеләренең күңелдәренә еткереү мөһим, ғәзиз һәм ҡәҙерле эштәрҙең береһе булырға тейеш. Улар бит һуғыш хаҡындағы иң дөрөҫ документтар, иң ышанысл шаһиттар!

Минең архивымда ла ана шундай аманаттар – Бөйөк Ватан һуғышында 1943 йылда һәләк булған оло ағайым Фәтхрахман Мифтаховтың өс тиҫтәнән ашыу һалдат хаттары һаҡлана. “Өскөл хаттар” тип исемләнгән тәүге шиғырҙар йыйынтығынан алып ошо көнгәсә ижадымда уның поэтик образы сағыла килһә лә, хат аманаттарын баҫтырыу-күрһәтеүгә, нисектер, ваҡыт та етмәй, форсат та булмай ҡуя. Ғәфү итмәҫлек вайымһыҙлыҡ, әлбиттә.

Ватанды һаҡлаусылар көнөн – 23 февралдә – тантаналы билдәләгән был айҙа, уларҙың бер нисәүһен генә булһа ла, “һәнәк” уҡыусыларына еткереүҙе мотлаҡ башҡарырға тейешле бурысым итеп күрәм. Тәүҙә ағайым биографияһына ҡағылышлы бер нисә һүҙ.

Мифтахов Фәтхрахман Фәйзрахман улы 1923 йылдың 14 ноябрендә Ишембай районы Кинйәбулат ауылында тыуа. Ҡырҡ икенсе йылдың башында хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, урта белемле, бөтә йәһәттән әҙерлекле егетте ярты айлыҡ радист-десант курсына ебәрәләр. Уҡып бөтөрөүгә бер айҙан да әҙ ҡалғанда, 42-се йылдың февралендә, Мәскәүгә немецтар яҡынлашҡас, ағайымды шунда оҙаталар. Бында иҫән-һау ҡалғас, ике меңләгән һалдатты дошман тылына ташлайҙар. Фашистар был операцияны алдан беләләр. Ҡаты алыш башлана...

Ә хәҙер хаттарға күсәйек. Уларҙың күбеһе әсәйемә, унан атайыма *(ул да хәрби хеҙмәттә ине,– Р.М.)*, ҡайһы берҙәре Мәғҙән ағайыма, Гәмбәрә апайыма, ә бер нисәүһе беҙгә – Нафиҡ менән Риф ҡустыларына – адресланған.

Бына тәүге хат. Хәйер, тәүге лә булмағандыр, сөнки был хат башына “өс” һаны яҙып ҡуйылған бит. Тәүгеләре, күрәһең, юғалғандар.

“Ҡәҙерле әсәйем! Һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ кеүек итеп тәрбиәләп үҫтергән оло улың, боец Фәтхрахмандан сикһеҙ күп ҡайнар, һағынышлы сәләм. Туғандарыма, туған-ырыуҙарыма, дуҫтарыма – шул уҡ һағынышлы сәләм! Сәләм һуңында бөтәгеҙгә лә матур тормош, сәләмәтлек теләйем.

Әсәй! Мин бик матур урында йәшәйем. Ашау бик яҡшы. Кейендерҙеләр. Атайымды оҙаҡламай күрәм тип торам. Шунда иҫке кейемде атайыма бирәм инде. 24 мартта Баймөхәмәт ағайҙарҙы күрҙем. Эшләгән ерҙән Нәфисә апайҙы күреп: “Апай!” – тип ҡысҡырғайным, илап ебәрҙе. Хәҙер көн дә күреп һөйләшеп торам. Һеҙгә сәләм яҙырға ҡушты. Ашауҙары яҡшы икән.

Әсәй! Минең өсөн ҡайғырмағыҙ, сөнки хур булырлыҡ егет итеп тәрбиәләмәнегеҙ. Мин штабта ла, хәрби комитетта ла бюро члены булып эшләйем.

Минең ваҡытым юҡ, һеҙ күп итеп яҙығыҙ. Һыйыр быҙауланымы? Пособие алаһығыҙмы? Ашарығыҙға бармы? Этебеҙ Пальма иҫәнме? Ауылда ниндәй үҙгәрештәр бар? Атайымдан хат алаһығыҙмы? Минән ниндәй ярҙам кәрәк? Бөтәһен дә хатҡа яҙығыҙ...

Сәләм менән улың –
Фәтхрахман”.

“Мәғҙән туғаным!
Хаттарҙың бөтәһен дә бер делоға тегеп бар. Атайымдыҡын да. Киләсәктә кәрәк булыр...



Бик күп китап уҡы, белгәнеңде яҙ, рәсем төшөр. Тормоштоң ҡәҙерен белеп йәшә. Уйнап-көл. Күп эшлә. Әсәйемә бер ҡаршы һүҙ әйтмәй хеҙмәт ит, һүҙен тыңла. Ул һине лә кеше итеп тәрбиәләр. Мине ул ошолай кеше араһында авторитетлы егет итеп үҫтерҙе.

Ағайың – Фәтхрахман,
10 апрель 1942 йыл".

Оло ағайым мәктәптә тик яҡшы билдәләренә генә уҡый. Ул үҙенең ошо ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә колхозда комсомол секретары, хатта бригадир булып эшләргә лә өлгөрә. Үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәгендә ҡатнаша, шиғырҙар ижад итеү менән бергә, пьесалар ҙа яҙа. Уларҙың ҡайһы берҙәрен ауыл сәхнәләрендә ҡуйып йөрөүҙәрен тиңдәштәре йыш хәтерләй торғайны.

Фәтхрахман ағайымдың һаҡланып ҡалған шиғырҙары күп түгел. Төрлө ҡағыҙға – дәфтәр биттәренә, фотокарточкалар артына яҙылған тиҫтәгә яҡын шиғырҙар – беҙҙең өсөн иң ҡәҙерле ҡомартҡылар булды, буласаҡ. Бына шуларҙың береһе. "Әсәйемә" тип исемләнгән шиғыр аҫтында "23 июль 1942 йыл" датаһы тора.

**Әсәйемә**

**Ҡәҙерле әсәм минең,**
**Һинең алда бына ант итәм:**
**Намыҫым менән,**
**Комсомолдың ғорур исеме**
**менән,**
**Һүҙҙәреңде һинең аҡларға,**
**Ватанымдың тыныслығын,**
**бәхетен**
**Һуңғы һулышҡаса яҡларға.**
**Ошо изге юлда йәш ғүмерҙе**
**Ҡара ергә илтеп һалһам да,**
**Даным ҡайтыр минең**
**көнбайыштан –**
**Еңеп ҡайтҡан**
**ҡыҙыл байраҡта.**
**Унда минең изге саф ҡаным**
**Ҡояш нуры кеүек**
**балҡып торор,**
**Еңеү байрамында**
**Һеҙҙең менән бергә**
**пир ҡорор...**

Ағайымдың ҡайһы хатын ғына асып уҡыма, уларҙың һәр береһендә, исемдәрен һанап әйткән сәләм-теләктәренән тыш, бөтәбеҙ өсөн дә борсолоу, хәстәрлек, һәр ҡайһыһында еңеүгә ҙур һәм сикһеҙ ышаныс бар. Бына уның 1942 йылдың 15 майында беҙгә – ҡустыларына адресланған хаты:

"Нафиҡ, Риф туғандарым!

Иртәнсәк кәкүк тауыштарын ишетһәгеҙ, ошо хат аша ебәргән күп сәләмдән дә күп матур сәләмдәр килтергән абзыйымдан, тип тыңлағыҙ.

Мин яҡшы йәшәйем. Иптәштәрем күп. Тик һеҙҙең кеүек туғандарым, әсәйем генә юҡ. Винтовкам да бар. Оҙаҡламай ҡәһәр һуҡҡыры Гитлерҙы туҡмайым да һеҙҙең янға өйгә ҡайтам. Мин ҡайтҡас, күмәкләп Тәйрүктә һыу инербеҙ. Балыҡ тоторбоҙ. Шамилды ла алып барырбыҙ. *(Шамил минең кустым ине, һуғыш ваҡытында вафат булып ҡуйҙы, – Р.М.)*

Ҙур ағайығыҙ Фәтхрахман".

Ә инде 1943 йылдың августында яҙған бер шиғырында еңеүгә һәм йәшәүгә бөтә күңеленән ышанып шулай ти:

**Мин йәшәрмен,**
**Йәшлек һүнмәҫ мәңге,**
**Йөрәгемә дошман атһа ла,**
**Мөмкин түгел минең**
**юғалыуым,**
**Кире табан Иҙел аҡһа ла...**

Фәтхрахман ағайым 1943 йылдың 5 сентябрендә Мәғзән ағайыма хат ебәрә. Был уның беҙ алған һуңғы хәбәре булып сыға:

"Мәғзән туғаным!

Мин һинең 21 августа яҙған хатыңды 1 сентябрҙә алып уҡыным. Бик шатландым, сөнки 1 Майҙа ғына һинән бер хат алғайным. Шунан бирле хат алғаным булманы. Минән өс ай хат алманым, тип алдашаһың буғай. Сөнки яңы урынға күсеп, адрестың "Д" литер булыуына ике ай тулып ҡына килә. Дөрөҫ, август айында бармағандыр. Ике хат ҡына яҙғайным, заданиенан ҡайтҡас.

Бер аҙнала ғына ун бер мәртәбә күктән һикерҙем. Егерме сәғәттән артыҡ күктә остом. Ул еңел түгел бит. Мин летчиклыҡка уҡыған кеше лә түгел... Үҙем дә аптырайым һаулыҡҡа. Кеше бер һикереүҙә ике килограмға кәмей, ә мин бер айға һигеҙ йөҙ грамм ғына кәменем. Бер аҙнала бер килограмға арттым. Шулай ҙа бик йонсоттоҙо. Бер һикергәндә арҡалағы тоғом төшөп юғалды. Бәләк сәғәтен сисеп шунда һалғайным...

Ҡышҡа ашау яғын ҡайғыртығыҙ.

Хушығыҙ..."

Ошо хаттан һуң, оҙаҡ та үтмәй булһа кәрәк, беҙҙең өйгә ҡағыҙ килтерҙеләр. Мин уны төш һымаҡ ҡына хәтерләйем. "Ҡара ҡағыҙ" тигәндәре шул булғандыр инде. Уны беҙгә әсәй бер ваҡытта ла күрһәткәне булманы. Беҙ был "ҡош теле"ндәй ҡағыҙға яҙылған хәбәрҙең ни тиклем фажиғә килтереүен әсәйгә ҡарап күрә инек. Ләкин ул уға ышанманы. Һуғышта яңылышыуҙарҙың булыуына, ағайымдың ҡайтыуына ышанып, ошо өмөтөн ғүмеренең һуңғы сигенәсә һүндермәне. Беҙ ҙә шул өмөт менән йәшәнек. 1985 йылда "Ағай хаттары" исемле шиғырымды яҙғайным. Уны композитор Мөфтәдин Ғиләжев йырға ла һалды. Ул "Атай хаттары" исеме менән башҡарыла. Икеһе лә дөрөҫ: һуғыш берәүҙәрҙең атаһын, икенселәрҙең иң ҡәҙерле кешеләренең ғүмерҙәрен өҙҙө.

Ағайым хаттары – һалдат аманаттары:

**Ғәзиз әсәй, балам уҡыр, тиеп,**
**Аҡ аманат итеп һаҡланы.**
**Әсәйемдең ҡайнар йәше**
**тамған**
**Әле лә иҫән ағай хаттары.**

Риф МИФТАХОВ.

## ✦ Әҙәби мираҫтан

# Баçалкылык

Әңгәмә

– Журналисмы һеҙ?

– Эйе, газетанан.

– Улайһа, кешеләр ҡыҙыҡһындыралыр һеҙҙе?

– Уларҙың рухи йөҙө.

– Тик ыңғай кешеләр?

– Эйе, яҡшы шәхестәр.

– Улайһа, мин ярҙам итә алам һеҙгә.

– Тыңлайым һеҙҙе.

– Мин һеҙгә бер замандаш тураһында һөйләйем, ул һәр яҡлап камиллеге менән ғәжәп һоҡланғыс кеше...

– Камиллиге менән?

– Эйе, ул бер кәмселеге лә булмаған камил кеше...

– Кәмселеге булмаған?

– Тап мин әйткәнсә!

– Был ҡыҙыҡ! Һөйләгеҙ.

– Тыңлағыҙ. Ул кеше йөҙөбашы, кейеме менән матур, зифа буйлы. Йәш булһа ла, ҙур белемле – институт тамамлаған. Белмәгәне юҡ, атлап йөрөүсе энциклопедия. Белемен эштә ҡуллана. Рационализатор, уйлап табыу менән шөғөлләнә, авторлыҡ хоҡуғына эйә. Үҙ белемен күтәрә. Техник әҙәбиәт яңылыҡтарын йотлоғоп уҡып бара. Бер информацияны ла белмәй ҡалмай, телевидение тапшырыуҙарын ҡалдырмай ҡарап бара. Культуралы, скрипкала уйнай. Хөрмәтсән, эргәнән сәләм бирмәй үтмәç. Бер саҡта ла кеше кәйефен боҙмаç, һин шыттырып һөйләһәң дә, ул раçлар. Күп һөйләшмәй, күргәнен генә әйтә. Физик, рухи яҡтан сәләмәт. Йортонда ҡайһы саҡ аш алдынан икмәк теләә. Балаларын тәрбиәләй, уларҙы спортҡа ылыҡтыра. Үҙе лә иртәнсәк гимнастика яһай, ә йөҙөү буйынса спорт мастеры булған боксерҙы уҙған. Эсмәй, байрам булмаған саҡта, рюмканы ҡулына ла алмай. Камиллек булһын өсөн тартыуҙы ла ташланы. Кеше ҡатынына ғашиҡ булмай, ҡулына көрт алғаны юҡ. Ауылға әсәһенә ай һайын утыҙ бер һум алтмыш тин аҡса ебәреп тора...

– Хатта... алтмыш тин?

– Теге... ни буйынса...

– Алимент буйынсамы?

– Эйе, ҡатыны бәйләнмәһен өсөн. Тағы әсәһенә йыл һайын бер нисә хат, тура килһә – сәйшәкәр...

– Тағы ниндәй сифаттар?

– Әйтәм, хәҙер әйтәм. Ҡатынының ата-әсәһенә ихтирамлы. Барғылай уларға, айырыуса емеш-еләк өлгөргәндә. Тағы ниндәй яҡшы яҡтары бар әле? Эйе, тәбиғәтте һаҡлау йәмғиәтендә ағза булып тора, хатта взнос түләгәне бар. Бик һаран да, бик йомарт та түгел. Кешенекен дә алмай, биреүгә лә бәйләнмәç, ғауғалашып йөрөмәç, хатта эткә лә асыуланмаç. Бына ниндәй кеше!

– Эйе, ҡыҙыҡлы кеше.

– Камил кеше! Ундай кеше тураһында очерк ҡына түгел, китап та яҙып булалыр ул, ә? Нисек уйлайһығыҙ?

– Бәлки. Ә кем ул?

– Асыҡ әйтергәме?

– Ә ниңә йәшерергә?

– Бер сер ҙә түгел, йәшереп тораһы юҡ. Ул кеше мин үҙем булам, иптәш журналист.

– Нисек һеҙ ул?

– Эйе, әле генә мин үҙемдең кешелек сифаттарым хаҡында һөйләнем. Яҡшы яҡтарҙы тағы ла һанап китеп булыр ине. Былары ла етер, минеңсә. Нисек, минең камил кеше булыуыма ышана алаһығыҙмы инде? Очерк булһа ла сығарырлыҡмы минең хаҡта?

– Уй юҡ түгел, былай.



– Улайһа, әйҙә, шөғөлләнегеҙ минең менән – камил кеше алдығыҙҙа, һорашығыҙ, йәшәүемдә, эшләүемдә күрегеҙ, артымдан эйәреп йөрөгөҙ, әҫәр өсөн эпизодтар, деталдәр табығыҙ...

– Шулай уҡмы ни?

– Әлбиттә, ниңә эште һуҙырға? Яҙығыҙ яҡшы очерк, мине семәр һүҙҙәр менән биҙәгеҙ, башҡалар уҡыһындар, минең кеүек камил булырға тырышһындар. Быға мин ҡаршы түгел, киреһенсә, һүрәтемдең журналда йәки газетала булыуын күргем килә. Әйҙә, тотоноғоҙ, иптәш журналист.

– Булмаҫтыр, ахырыһы.

– Бәй, ни булды? Үҙегеҙ әйттегеҙ, һеҙгә бит яҡшы шәхестәрҙең рухи йөҙөн күрһәтергә кәрәк. Алдығыҙҙа шундай кеше...

– Булмай, дуҫҡай. Яҡшы сифаттарың бар һинең. Тик камил кеше булыу өсөн шәхескә кәрәкле мөһим бер нисә сифат етешмәй.

– Ниндәй сифат тағы?

– Элементар баҫалҡылыҡ. Кешене биҙәүсе, уны матурлаусы, унын лайыҡлылығын күтәреүсе, бүтәндәрҙә үҙеңә ҡарата ихтирам һәм хөрмәт тыуҙырыусы баҫалҡылыҡ етешмәй...

**Фәтҡулла КОМИССАРОВ.**

## Тар фатирҙа йәшәүселәргә кәңәштәр

● Иҙәнегеҙҙе, түшәмегеҙҙе йыш буямағыҙ: бүлмәләрегеҙҙең былай ҙа самалы бейеклеге тағы ла кәмей төшәр.

● Шатлыҡтан йәки көрләктән һикермәгеҙ: башығыҙ түшәмгә бәрелеп, телегеҙҙе тешләп өҙөүегеҙ бар.

● Стенаға ҡунған себенгә “хлопушка” менән һуҡмағыҙ: стеналарығыҙҙың ауып китеү ҡурҡынысы бар.

● Радио уткәреп мәшәҡәтләнмәгеҙ: күршеләрҙеке былай ҙа яҡшы ишетелә бит.

● Ҡунаҡ йыйғанда күмәкләп бейергә уйламағыҙ: дөбөрләшеп бейеү тауышына аҫҡы ҡаттағыларҙың күтәрелеүе, табынға “ҡара тараҡан” булып төшеүҙәре бар.

**Ғәбит САДИҠОВ.**







## ✦ Әҙ-мәҙ мәҙәк

☺☹☺

**Һунарға китеп барған берәүҙе күршеһе туҡтата:**

**– Һин ҡайҙа, иҫәр? Сезон ябылғанын беләһең бит!**

**– Тс-с-с, мин беләм дә ул, ҡатын белмәй, ишетеп ҡалмаһын...**

☺☹☺

**– Минең этем шул тиклем холоҡһоҙ, һунарҙа берәй нәмәгә атып, тейҙерә алмаһам, ер тырнап, минән көлә, – тип зарлана бер һунарсы икенсеһенә.**

**– Ә тейҙерһәң?**

**– Әллә инде, ул миндә өс йыл ғына йәшәй бит әле...**

# Башҡортостан Республикаһының беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы РӘХИМОВҡа – 75 йәш



# Бөйөк ЯБАЙЛЫҠ

Президент тураһында күп яҙалар. Берәүҙәр маҡтай, икенселәр таплай. Ғәжәп түгел: һәр кем үҙ күҙлегенән – үҙ ҡалансаһынан ҡарай. Мине иһә Президент бейеккә күтәреп ирәйтмәне лә, “элитный” йорттан фатир биреп осондорманы ла, лайыҡһыҙ оло бүләктәр менән әүрәтмәне лә. Һәм шул уҡ ваҡытта таҙа тәнҡитебеҙ өсөн йәберләп, рәнйетмәне лә. Шуға күрә ялағайҙарға ҡушылып, уны күккә сөйөп данламайым да, яла ягыусыларға эйәреп яманламайым да. Нисек булһа, шулай күрәм. Һәм нимә күрһәм, шуны яҙам.

Беренсе тапҡыр уның менән партократия заманында осрашҡайным. Әллә пленумда, әллә конференцияла урындарыбыҙ бергә тура килде.

Ораторҙарҙың ялҡынлы телмәрҙәренән зал тетрәп тора. Бына бер эшем эйәһе, трибуна артында ҡыҙыл һүҙҙәр һөйләп, һауаны һелкетә. Шул саҡ эргәмдә ултырған иптәш түҙмәне:

– Нимә лыбырлай инде? Болтун бит ул! – тип ҡуйҙы.

Мин күршемә күҙ һалдым. Асыҡ сырайлы, мөһабәт кәүҙәле был кешенең күкрәгенә СССР халыҡ депутаты значогы ҡаҙалғайны. Уның һүҙе ҡыҙыҡ тойолдо, улай ғына түгел, бик урынлы әйтелде. Сөнки теге “болтун”, яңыраҡ ҡына миңә шылтыратып, сәғәт буйына матур һүҙҙәр һөйләй-һөйләй, үҙе тураһында “Һәнәк”тә баҫылған фельетонды кире ҡағып маташҡайны. Шул иҫемә төштө лә, күршемде йөпләп:

– Эйе шул, болтун, – тинем.

Аҙаҡ эргәмдәге был депутат Башҡортостандың бөтә депутаттарына ла башлыҡ булып китте – Юғары Совет рәйесе итеп һайланылар уны. Черниковкалағы ҙур заводын ҡалдырып, Ағиҙел буйындағы аҡ йорттоң ҙур бүлмәһенә килеп ултырҙы.

Гәҙиттә, республикабыҙҙың ҡара һәм һоро йорттарында эшләүсе бынамын тигән кешеләр ҙә аҡ йортҡа күскәс, ҡапыл үҙгәреп китеүсән була. “Был кеше ни эшләр икән?” – тип уйланым.

Шулай бер саҡ уның ҡабул итеү бүлмәһенә ингәйнем. Кемдәр генә юҡ унда! Береһенән-береһе текәрәк түрәләр, министрҙар... Ишеккә яҡын барырлыҡ түгел. Шул саҡ рәйес иптәш (әйткәндәй, ул һаман да иптәш, “әфәнде”гә әйләнмәне) үҙе килеп сыҡмаһынмы.

– “Һәнәк” ни эшләп йөрөй? – тине ул, миңә иғтибар итеп.

– Хәлегеҙҙе белергә тип килгәйнем дә... Бына министрҙарҙан уҙып булмай. Көтәүҙәре менән йыйылғандар.

– Министрҙар күп беҙҙә, ә “Һәнәк” берәү генә. Әйҙә, үт!

Мин уға бик һирәк һәм бик кәрәк ваҡытта ғына барҙым. Һәм һәр саҡ ҡанатланып ҡайттым. Ә бит элек был йорттан ҡанаттарым ҡайырылып сыҡҡан сағым аҙ булманы. Журналдағы бәләкәй генә тәнҡит өсөн дә оло ғауға ҡуба ине.

Туҡһан беренсе йыл аҙағында совет матбуғатының әсәһе – компартияның ҡулынан йүгән ысҡынғас, гәзит һәм журналдарҙың яҙмышы ҡыл өҫтөндә тороп ҡалды – уларға ябылыу ҡурҡынысы янаны. Ләкин Юғары Совет матбуғат баҫмаларына үлергә юл ҡуймаһы, уларҙы үҙ ҡанаты аҫтына алды. Шулай итеп, Юғары Совет “Һәнәк”тең яңы ойоштороусыһы булып китте, ә уның рәйесе, Шакиров, Хәбибуллин, Горбуновтарҙан һуң, минең дүртенсе хужама әйләнде. Яңы хужа иҫке хужаларым ике тиҫтә йыл буйына хәл итә алмаған ике ҙур мәсьәләне ике йылда хәл итеп ҡуйҙы: редакцияға машина бирҙе һәм журналыбыҙҙы урыҫса ла сығарырға мөмкинлек тыуҙырҙы. Хәҙер иһә “Һәнәк” (“Вилы”) илебеҙҙә иң яҡшы сатирик журналдарҙан иҫәпләнә. Ә Башҡортостан Республикаһы Рәсәйҙәге иң күп матбуғат баҫмалары алдырып уҡыусы төбәк булып һанала.

“Һәнәк” йәптәренә кемдәр генә эләкмәй! Берәүҙе лә аямай ул. Хатта үҙ Президентыбыҙҙы ла эләктерҙе. Ни өсөн, тип ни... Рәсәй Президенты һайлауҙары ваҡытында үҙенең бөтә яҡшы хеҙмәтен Мәскәү хужаһыныҡы итеп күрһәткәне өсөн! Журнал тышлығында “оло ағайыбыҙ”ҙың һүрәтен күргәс, элекке ғәҙәт буйынса, күптәрҙең сәстәре үрә торҙо.

– Һин иҫәнме? – тип хәлемде һорашылар дуҫтар ҙа, дуҫ түгелдәр ҙә. – Башыңа Президент туҡмағы төшмәнеме әле?

– Юҡ, төшмәне. Сөнки Президентыбыҙҙың ғәҙел тәнҡитселәрҙе, талант эйәләрен туҡмай торған туҡмағы юҡ.

Ә бит теге хужалар булһа, ошо карикатура өсөн күрмәгәнде күрһәтерҙәр ине. Әлеге яҙмамды ла яҙа алмаҫ инем. Яҙһам да, баҫмаҫтар ине. Сөнки “Һәнәк”тең һәр һаны “Аҡ йорт”та уҡылып, тәнҡит һүҙҙәре ҡыл иләк аша үткәрелә торғайны. Әллә хәҙер ысынлап та демократияны һуң беҙҙә? Һәр хәлдә Президентыбыҙ иҫке партократтан яңы демократҡа әйләнгән кеше түгел инде! Ул тыумыштан шулай – бар булмышы менән халыҡсан. Шуға күрә, ҡайһы бер Рәсәй

түрәләре кеүек, кабинеттан сыҡмайынса телефон аша ғына етәкселек итеп ултырмай, һәр саҡ – халыҡ араһында. Кешеләр менән осраша, күрешә, һөйләшә, кәңәшләшә. Кемгәләр аҡыл бирә, дөрөҫ юлды күрһәтә, кемделер өйрәтә, өйрәтеп тә аңламағандарҙы үҙ урынына ултырта...

Бер көн иртән эшкә килгәндә шундай хәлгә тап булдым: Матбуғат йорто алдында былай ҙа юҡ ҡарҙы тырыша-тырыша һепереп яталар. “Башҡортостан” нәшриәте хеҙмәткәрҙәре элек тә ялт итеп торған эш урындарын тағы ла нығыраҡ ялтыратып ҡуйғандар. Баҡтиһәң, Президентты көтәләр икән.

Бына ул билдәләнгән ваҡытта килеп тә етте. Һәм, Петр I һымаҡ, эре аҙымдар менән ҡыҙыу атлап, бер төркөм полиграфистарҙы, журналистарҙы, мөхәррирҙәрҙе эйәртеп, цехҡа үтте. Унан ҡалышмаҫҡа тырышып, йәш кенә журналистарҙың да мышнай-мышнай йүгереп барғанын күргәс, Президентыбыҙға нисә йәш һуң әле, тип уйлап ҡуйҙым.

Мәғлүм булыуынса, республикабыҙҙың полиграфия сәнәғәтен үҫтереүгә “Башҡортостан” дәүләт нәшриәте тос өлөш индерә. Унда баҫылған төҫлө гәзит һәм журналдарҙың күләме арткандан-арта бара. Предприятиеның матди хәле йылдан-йыл яҡшыра. Әлбиттә, Президентыбыҙҙың ярҙамы ҙур бында. Әле бына төҫлө журналдар баҫыу өсөн Германиянан “Ротоман-55” машинаһы һатып алғандар. Ул шундай уңған – “Уфа”, “Башҡортостан ҡыҙы” кеүек журналдарҙы һә тигәнсе баҫа ла ҡуя. Былдай техника әкәмәте Рәсәйҙә бармаҡ менән генә һанарлыҡ, ә яҡын-тирә өлкәләрҙә бөтөнләй ҙә юҡ икән.

Президент уның нисек эшләгәнен ентекләп ҡараны, белгестәргә һорауҙар бирҙе, эшселәрҙең хеҙмәт шарттары менән ҡыҙыҡһынды. Полиграфистар һәм журналистар менән, күптәнге таныштары кеүек, дуҫтарса иркен һөйләште. Беҙҙең ҡараштар осрашҡас, ул ғәҙәтенсә шаяртып та алды. Унан етди генә:

– Журналығыҙҙы алалармы? – тип һораны.

Дөрөҫ, быйыл “Һәнәк”те алдырыусылар һаны артты артыуын. Ләкин элекке тираждар юҡ шул инде.

– Их, – мин әйтәм, – бындай “Ротоман”дар совет заманында булһа икән! – Ә үҙем эстән янам: “Элекке тираждар булһа ине ул хәҙер!”

Президент нәшриәттең хеҙмәт уңыштарын юғары баһалап, журналистарҙың һорауҙарына яуап бирҙе лә, нисек килеп инһә, шулай ҡыҙыу атлап сығып та китте. Сәй эсеп тә торманы.

Оло ҡунаҡты оҙатҡас, мин, нәшриәт директоры Анатолий Безрукавниковтың яурынынан ҡағып:

– Ҡотлайым, маладис! – тигәйнем, теге йылмайып ебәрҙе:

– Арҡам шыбыр тиргә батты...

Бынағайыш! Ә бит бөтәһе лә матур үтте, тәнҡит һүҙе лә булманы. Ул ни, элек кенә етәкселәрҙе бюроға саҡырып, шыбыр тиргә батҡансы ҡыҙҙыралар ине. Күпте күргән, күпте кисергән Анатолий Иванович, әлбиттә, быны яҡшы хәтерләй. Уның әлеге тулҡынланыуы һис тә ҡурҡып-ҡаушап ҡалыуҙан түгел, ә юғары етәкселектең, туған коллективының, коллега һәм партнёрҙарының, йөҙҙәрсә, меңдәрсә кешеләрҙең ышанысын аҡлау өсөн яуаплылыҡ тойоуҙан ғыналыр. Мин шулай тип уйлайым. Һәм бығa һөйөнәм.

Ә беҙҙең тынғыһыҙ Президентыбыҙ икенсе көндө Башҡортостандағыса ҡыҙыу аҙымдар менән Силәбелә йөрөй ине инде...

Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдары башында, әле беҙҙә президент та булмағанда, Мәскәүҙең ҙур залдарында сығыш яһап, йыш ҡына былай тип әйтә торғайным: “Королдәр, хандар, батшалар, генсектар, президенттар, премьерҙар, министрҙар киләләр ҙә китәләр, журналистар, яҙыусылар ҡалалар”. Инде ғибәрәгә әйләнгән был һүҙҙәремә өҫтәп, мин бөгөн шуны әйтә алам. Ҡәләм оҫталары менән бергә булған хакимиәт әһелдәре бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла китеп юғалмай. Улар һәр саҡ халҡы менән ҡала. Бына, беҙҙең Президентыбыҙ һымаҡ. Ул да бит, ана, Матбуғат йортонда эшләүселәрҙең күңелендә тороп ҡалды. Ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, ир-аттар ҙа уның рухи таҙалығына, физик сәләмәтлегенә һоҡланып бөтә алмайҙар.

Әгәр ҙә мин сатирик булмаһам, был урында иҫ киткес шәп һүҙҙәр яҙыр инем. Ләкин, ғәфү, йәмәғәт, етәкселәрҙе маҡтау – сатириктар эше түгел. Былай ҙа, күңел ирееп, аҙыраҡ лирикаға бирелдем, буғай...

Бөгөнгөләй хәтеремдә, уға беренсе тапҡыр Президент танытмаһы тапшырыу тантанаһында, йәғни хәҙергесә әйтһәк, инаугурацияла ҡотлау вә маҡтау һүҙҙәре самаһыҙ күп яуғайны. Уларҙы тыңлап, үҙе лә уңайһыҙланып ултырҙы һымаҡ. Тантананан һуң ғәҙәттәгесә йылы ғына ҡул ҡыҫышҡас, әйттем уға:

– Бер йүнле кеше бар ине, әрәм булa инде...

– Ниңә улай тиһең?

– Президент булғас, кеше боҙола бит.

– Юҡ, мин ул йәштән уҙған!

Юмористарға хас булғанса, хәйләкәр генә көлөп ҡуйҙым: бер нисә йылдан күрербеҙ әле, йәнәһе.

Президенттарҙың да, ябай кешеләр кеүек, төрлөһө була шул. Горбачев, Ельцин, Дудаев... Күҙ алдыбыҙҙа ғына күпме президент әрәм булды.

Илебеҙҙә “киреформа” үткәреүсе бихисап демократтарҙан айырмалы буларaҡ, беҙҙең Президент емереүсе түгел. Ул – төҙөүсе. Халыҡ күңелендә лә, тарихта ла шулай ҡаласаҡ.

Бөгөн уны маҡтайҙар, бөгөн уны таплайҙар. Ә ул үҙен данлаусыларҙан да, яманлаусыларҙан да өҫтөн. Сөнки ул... ябай кеше. Ябай халыҡты тыңлай, аңлай. Уның өсөн эшләй, йәшәй. Һәм ошо ябайлығы менән бөйөк тә ул!

Президент булғас та, әрәм булманы, әҙәм булып ҡалды был Кеше – Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов. Сатириктарҙы ла шаҡ ҡатырырлыҡ ҡыуанысл хәл!

Ә бит бәғзе берәүҙәр түрә булғас сабатаһын түргә элеп, ябай кешеләрҙе бөтөнләй күрмәүсе күҙле бүкәнгә әйләнә. Ундайҙарҙы һәм, ғөмүмән, лайыҡһыҙ бәндәләрҙе хакимиәткә яҡын килтермәй Президентыбыҙ. Ә инде яңылыш килеп эләккәндәрен юғары урындарынан шундуҡ ҡыуып төшөрә. Бына шундайҙар бөгөн уға бысраҡ атып маташа.

Һәнәк иһә Башҡортостаныбыҙҙың беренсе Президентын данлыҡлы юбилейы менән ҡайнар ҡотлай һәм уға изге теләктәрен еткерә:

**– Бөйөк, ләкин ябай Кеше**
**Булып ҡалдың, Мортаза.**
**Халҡыбыҙ таҙа-һау булыр,**
**Әгәр булһаң һин таҙа.**

**Марсель СӘЛИМОВ.**

*А. Андреевтың дуҫтарса шаржы.*

# Ултырыш

Юмореска

Утыҙ йыллап ябай хеҙмәткәр булып тир түккән Хәй Хәмиевичты үҙе эшләгән бәләкәй генә ойошманың етәксеһе итеп тәғәйенләнеләр. Дөрөҫөн әйткәндә, был көндө ул оҙаҡ көттө. Ниһайәт, әлекке директорҙы үрләткәс, ойошмала Хәй Хәмиевичтан башҡа өс пенсионер ҙа, институтты быйыл тамамлап килгән ике йәш белгес кенә тороп ҡалды.

Тәүге көнөн директор вазифаһында ҡаршылаған Хәй Хәмиевич иркен бүлмәһен ҡәнәғәт йөҙ менән байҡап сыҡҡас, өҫтәлдә өйөлөп ятҡан гәзиттәргә ҡапланды. Түрәләрҙән ҡасып ҡына рәхәтләнеп гәзит уҡыу – уның эштәге иң ҙур ҡыуаныстарының береһе ине. Тик тыйыусы, “эш менән бул”, тип әрләүсе булмағас, гәзит уҡыу тиҙ ялҡыта икән. Һыра эсеү – уның икенсе ҙур шатлығы, тик был шәп мәл төшкө ял ваҡытындараҡ етә торғайны. Әле иртәрәк, эш көнө саҡ башланып тора.

– Булһа ни, – тип үҙ алдына һөйләнде директор. – Үҙем баш, үҙең түш, теләһәм – иртән эсәм, теләһәм – төштән һуң.

Ул йыуан баш бармағын кнопкаға баҫты ла документтар һалынған папканы алдына һалды.

– Тыңлайым, Хәй Хәмиевич!

Мөкиббән китеп алдындағы ҡағыҙҙарға текәлгән директор оҙаҡ көттөргәндән һуң ғына башын күтәрҙе лә, һораулы ҡарашын үҙенә төбәп ҡатып ҡалған секретарь ҡыҙға бер литр һыра килтерергә ҡушты. Бындай йомошто үтәп өйрәнмәгән ҡыҙҙың күҙҙәре маңлайына менде, ул хатта түш-баштарын уйнаҡлатырға ла онотоп, сығып китте. Ә директор ҡәнәғәтлек менән ҡулдарын ыуҙы. Түрә булһаң рәхәт икән, ана бит, әлек һыра тип үҙе саба ине, хәҙер килтереп кенә бирәләр. Һыра эскәс, бер аҙ йөрөп килер. Әлекке директорҙар шулай итә ине бит. Түрә булыуҙың нәмәһе бар? Иртән коллективты йыйып, эшләмәйһегеҙ, тип өҫтәл һуғаһың да, көнө буйы юғалып йөрөп, эш сәғәте бөтөр алдынан килеп, өҫтәлдә йәнә бер төйөп, ҡайтып китәһең.

Тик Хәй Хәмиевичҡа был көндө лә, иртәгәһенә лә һыра менән һыйланырға тура килмәне. Йәһәт кенә хакимиәткә кәңәшмәгә килеп етергә ҡуштылар. Уныһы өс сәғәттән бөткәйне, янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса комиссия ултырышына саҡырҙылар. Уның артынса төҙөкләндереү буйынса комиссияның йомғаҡлау йыйылышы башланды. Ә кисенә сираттағы һайлауҙы үткәреүгә арналған "түңәрәк өҫтәл" ойошторолдо. Иртәгәһен беҙҙең тормошто көндән-көн яҡшырта барған партия вәкилдәре килеп, кискә тиклем улар өсөн тауыш бирергә өгөтләне, тәнәфестәрҙә ике кәңәшмә, өс комиссия ултырышы булды.

– Өйөндә оноттоң даһа түрә булғас, ҡайҙа йөрөнөң? Төн еткәс ҡайтып кергәс, йөҙө емерек ҡатынының һорауына:

– Ултырыш! – тип кенә яуап бирә алды Хәй Хәмиевич, үҙенең түрәнән ҡасып гәзит уҡыған, бер ҡайғыһыҙ һыра һемергән сағын һағынып. Унан туҡтауһыҙ һыҙлаған арт һанын ыуғылап, ыңғырашып ҡуйҙы.

**Марат ӘМИНЕВ.**




**– Кризис бөткәс, уятырһың...**
– Разбудишь, когда кризис закончится...












# “Бабайсылыҡ”

“Бабайсылыҡ” – армиялағы “йәш” һалдат менән “карт” һалдаттың үҙ-ара мөнәсәбәте. Йәғни йәш һалдат һис һүҙһеҙ “карт” һалдатҡа буйһонорға, уның силғауҙарын, ойоҡтарын, күлдәктәрен йыуырға, койкаһын йыйыштырырға тейеш. Әгәр ҙә “йәш” һалдат “карт” һалдатҡа буйһонмаһа, уны һәр төрлө яза көтә. Бәҙрәфкә индереп туҡмайҙар, ата-әсәһенән аҡса һоратып алдырттырып, “карттар” үҙ-ара бүлешә. Ашханала кәтлит, май, ит кеүек аҙыҡтарын тартып алалар.

Сәнғәт донъяһында ла “бабайсылыҡ” бар...

Улар араһында “бабайсылыҡ” нисек? Шул хаҡта һөйләйем әле. Бында, армиялағы кеүек, йәш, ҡарт булыуға ҡоролмаған. Түрәләргә дуҫ, яҡын әҙәмдәргә һәр саҡ маҡтап һөйләп йөрөүгә ҡоролған. Ундайҙарға төрлө исемдәр, фатирҙың яҡшыһын, эш хаҡының ҙурын бирәләр. Һәм шундай артистар башҡалар алдында үҙен өҫтөн тота.

Мәҫәлән, бирәүҙең исем-дәрәжәләре башҡаларҙыҡына ҡарағанда бик күп. Фатиры ла шәп. Үҙәктә. Ул түрәләр тарафынан иркәләтелгән артист, концерт нормаларын үтәмәһә лә, хатта эшкә сыҡмаһа ла, уға тулыһынса эш хаҡы түләп баралар. Ошондай матур шарттарҙа йәшәп, унда ун йылдар элек үк хроник алкоголизм сире барлыҡҡа килә. Гастролдә йөрөгәндә башҡалар тирләп-бешеп концерттар ҡуйһа, ул айный алмай ҡунаҡханала ята. Уға урын өсөн дә, тәүлеккә лә түләйҙәр.

Бына бер саҡ ул бик хәтәр иҫерә. Автобуста ултырған килеш йоҡлап китә. Шунан ул ике эскәмйә араһына төшөп бөкләнеп ята. Шул килеш 2–3 сәғәт бара. Өфөгә килеп етәбеҙ. Ләкин уны ике эскәмйә араһынан тартып сығара алмайбыҙ. Бөкләнгән килеш, биле ойоған, ҡатҡан. Һис кенә лә яҙылмай. Шул килеш тағы бер аҙ барған булһа, үлеп ҡалыр ине. Эскәмйәнең иҙәнгә нығытылған болттарын һүтеп алып, саҡ сығарып алабыҙ. Аяҡтарына массаж эшләп, терелтеп, өйөнә илтеп ҡуябыҙ.

Ваҡыт үтә. Ул тағы концертта ҡатнашмай. Уның ошо холҡо хаҡында үҙенә әйтәм. Ләкин ул:

– Ҡыҫылма миңә. Һин кем?! Минең тырнағыма ла тормайһың. Мин өйөмдә ятырмын. Ә һин эшлә минең өсөн. Кәрәкле артист булһаң, үҙеңә звание бирерҙәр ине, – тип һүгә мине. Мин уға ҡаршы һүҙ әйтмәйем.

“Әбейселек” тағы ла ҡыҙығыраҡ. Уныһын “һәнәк” уҡыусыларына тағы ла бер һөйләрмен әле...

**Юнир САЛАУАТОВ.**

# Муса СИРАЖИға – 70 йәш



## Йыртыҡ ҡапсыҡ

Геүләй төҙөлөш майҙаны,
Эштәр бара күңелле.
Уны шулай Ғиззәтулла
Ойоштора түгелме?

Уның менән таныштырып
Үтәйем мин элгәре:
Штатта ул таш ташыусы,
Көлдөрөүсе – һөнәре.

Алыҫтарға сыңлап китә
Көләүҙәрҙең шат сыңы.
Тимәк, Ғиззәттең асылған
Йәнә көлкө ҡапсығы.

Ҡыҙыу мунса таштарына
Пар һалғандай сажлатып,
Тора Ғиззәт, минут һайын
Шаянлыҡты шартлатып.

Ижади эҙләнә Ғиззәт,
Үҙ өҫтөндә күп эшләй.
Көн дә элек һөйләгәнгә
Дүрт-биш көләмәс өҫтәй.

Ныҡ көрәшә эш ваҡытын
Экономиялау өсөн дә:
Унлап көләмәс һөйләй ул
Ярты сәғәт эсендә...

Әммә подряд ысулына
Күсеп алғас, шул ғәжәп:
Эшселәргә бар ни, юҡ ни
Ғиззәт һөйләгән мәҙәк.

Йыртылды көлкө ҡапсығы –
Булды Ғиззәткә яфа.
Көләүсе юҡ, төштө баһа...
Үҙенән көләм: “Ха-ха!”

## Ҡыуалар

– Машинаңды бик ҡабалан
Ҡыуаһың ниңә, туған?
– Юҡ, машина ҡыумайым мин,
Пылан ҡыуам мин, пы-лан!..
Ә һин нисектер, иптәш,
Туҡтаттың мине ниңә?
Әллә планды тултырыу
Кәрәкмәй тиһең минә...

## Барыбер

– Бына шулай, Айыу дуҫҡай,
Сығаһың да өңөңдән,
Юл алаһың һин өс көнлөк
Кәңәшмәгә бөгөндән.

– Унда барһам, йоҡом ҡала...
Уйлайымсы тағы бер.
– Һиңә ҡайҙа йоҡлаһаң да
Түгелме ни барыбер?!

## Кеше юҡта...

Ришүәтте ене һөймәй...
Шундай беҙҙең Ишкүәт.

---



А. ВАСИЛОВ

Әкрен генә ишек шаҡыған тауышҡа башын күтәреп:

– Да! – тип ҡысҡырҙы профком рәйесе Иҙрис. Ишектән бәләкәйерәк буйлы, әммә мыҡты кәүҙәле, был заводта күптән эшләгән эшсе килеп инде.

– Нимә булды, Хәмит ағай? Ғүмереңдә профком ишеген асҡаның юҡ ине. Йомошоң бик срочный булмаһа, иртәгә килерһең. Обкомсоюзға ашығам.

– Срочный шул, Иҙрис туған.

– Әллә өйөңдә бер-бер хәл булдымы?

– Какой өйҙә, бында, цехта! Полный рост, фотонан натура яһап ҡуйғандар, етмәһә, оҙон мыйыҡта эшләгәндәр. Алдыр стена гәзитеңде, мине ундай мыҫҡылға ҡалдырма.

– Һине кеше көлдөрөрлөк итеп төшермәҫтәр, бары берәй аңлашылмауСанлыҡтыр был. Юҡҡа хафаланма, ағай.

Булманы, тип уйланы, ахыры, Хәмит абзый: кәпәсен пеләш башына батырып кейҙе лә директор бүлмәһенә юлланды.

– Иптәш директор, Булат туған, – тине Хәмит ағай, ҡул ҡыҫышып күрешкәс, – ашхана алдындағы стена гәзитегеҙҙе алығыҙ, зинһар...

– Нимә булған?

– Әҙәм көлкөһө был...

– Әллә һине яманлап яҙғандармы? Булмаҫ, һин бит ихтирамлы эшсе.

– Уныһы юҡ, ә бына һүрәтте төшөрөп ҡуйғандар.

– Яман итепме әллә?

– Юҡ, Булат туған, әммә шул саҡлы ат ҡойроғондай мыйыҡ яһамайҙар бит. Ҡулдағы автоматы

Килтерһәләр ҙә ҡырт киҫә:
– Алмайым мин ришүәт!

Кеше барҙа һөрән һала:
– Уның өсөн закон бар!
Кеше юҡҡа бышылдай был:
– Уның өсөн ҡатын бар...
Мә, адрес – өйгә бар!..

## Завферма ниңә ояла?

– Ниңә былай ғауға ҡупҡан?
Фермаға утмы ҡапҡан?
– Юҡ, – ти малсы, – тәҙрәне
Бер үгеҙ һөҙөп ватҡан.

Ул, – ти, – "ҡыҙыл
мөйөш"тәге
Үрмә гөлгә үрелгән.
Ас үгеҙгә гөлдәр, ахыры,
Үлән булып күренгән...

Мөгөҙ сите тейеп киткән
Мөдирҙең үҙенә лә,
Күренергә ояла хәҙер
Ул кеше күҙенә лә...




# Мыйыҡ

(Булған хәл)

ярай инде. Заманында уны тотҡан саҡтар бар ине, әлбиттә.

– Йәмәғәтселек бит ул, Хәмит абзый, Алла ҡөҙрәтенә тиң. Уның ҙурлауына ла, хурлауына ла ҡаршы бара алмайһың. Бына һиңә цехҡа эшкә килгәндә нисә йәш ине? – тип һораны директор, уға туп-тура ҡарап.

– Күптән инде, ун һигеҙ тулмаған ине.

– Ә һин үҙ ғүмереңдә күпме йәштәрҙе эшкә өйрәттең, әле лә берешмәйһең. Улар һине ихтирам итеп, "Мыйыҡлы Хәмит" тип йөрөтәләр.

Хәмит абзый был юлы өндәшмәне, боролоп сыҡты ла китте. Әммә был һөйләшеү дауамһыҙ түгел ине. Шул көндө үк, төшкө аш ваҡытында, цехта шау-шыулы бер һөйләшеү булды.

– Йәмәғәт! Ташлап тороғоҙ әле шул доминоғыҙҙы! – тип һүҙ башланы урта йәштәрҙәге бер эшсе. – Нәмәгә кәрәк булды һуң ул Мыйыҡ Хәмит абзыйҙың стена гәзитендәге портреты?! Әйҙә әйт, Хәмит абзый, һүҙеңде.

Өҫтәл ҡырына әллә ҡайҙан Хәмит абзый килеп баҫты. Сырайында үпкә ҡатыш рәнйеү ҙә бар ине.

– Пенсияға китә икән, тигән булалар. Ялған! Кемдеңдер тауышы яңғыраны. Ниндәйҙер шаяны ҡул сәпәкәйләне уға ҡушылып, эшселәр дәррәү ҡул сабып ҡуйҙылар.

Хәмит абзыйҙың, күңеле йомшара башланы, күҙҙәренә йәш эркелде. Уға барыһы ла үҙ итеп, йылмайып ҡараусан уның битенә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Нәмәлер әйтергә уйлағайны ла, ҡул һелтәп, яңынан урынына барып ултырҙы.

– Һин, асыуланма, Хәмит абзый, беҙ бит барыһын да беләбеҙ, – тине стена гәзите редакторы. – Хеҙмәте олоноң хөрмәте лә оло, тип уйланыҡ. Буйға бәләкәй булһаң да, ә бит хеҙмәтең... – Был урында редактор ҡулы менән Хәмит ағайҙың ерҙән ни саҡлы бейеклеген күрһәткәйне, бар кеше бер юлы матур итеп йылмайып-көлөп ҡуйҙы. Стена гәзитенең был һаны 23 Февралгә – Ватанды һаҡлаусыларға арналған булғас, үҙебеҙҙе йәштән эшкә өйрәткән, әле лә цехта хеҙмәт өлгөһө булған өсөн беҙ уны автомат тоттороп, "мыйыҡлы һаҡсы Хәмит" тип бары тик маҡтау йөҙөнән эшләнек. Ә шаржда үҙен, йәш сағындағы һымаҡ, мыйыҡлы ла, сибәр ҙә итеп төшөрҙөк.

Хәмит ағайҙы берәү ҙә күрмәне: ҡытыршы бармаҡтары менән кәпәс ситтәрен һыйпай-һыйпай, сығып китергә лә өлгөргәйне инде. Башҡаса ул стена гәзите тураһында һүҙ ҡуҙғатманы. Бары санаторийҙан күңеле күтәрелеп ҡайтҡас, ул бәләкәй мыйығы аҫтынан шым ғына көлөп-йылмайып үтеп китә торғайны.

**Дим ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

**Сөләймән ЛАТИПОВ**

# Тот папкаңды!

**Скетч**

*Начальник бүлмәһенә йәш егет килеп инә.*

**Егет.** Саҡырҙығыҙмы?

**Хужа.** Ин... Һин бик һәләтле егет булып сыҡтың. Һәр нәмәгә атлығып, ҡыҫылып бараһың. Булдыҡлыһың, тием...

**Егет.** Аңламаным.

**Хужа.** Аңланың!.. Аңламаған-ға һалышма. Министр килгәндә нимә эшләнең?

**Егет.** Министр?.. Ә-ә, уға эш барышын аңлаттым. Һеҙгә ҡысҡыра башлағайны бит.

**Хужа.** Уға ҡысҡырырға ла ярай. Ә санэпидстанциянан килгәндәргә ниңә ҡыҫылдың?

**Егет.** Һуң... Ярҙам иттем... Һеҙгә.

**Хужа.** Иттең!.. Шул арҡала саҡ штраф һалманылар.

**Егет.** Мин...

**Хужа.** Әле пожарник килә. Тикшерергә. Ҡыҫылаһы булма. Ишеттеңме?

**Егет.** Ярай...

**Хужа.** Ни эшләптер, ышанмайым һиңә. Әйҙә, икенсе урынға күсереп ултыртам. Бар, ҡағыҙҙарыңды алып сыҡ...

*Егет хужа эргәһендәге бүлмәнән кағыҙҙарын алып сыға һәм хужаһына эйәрә. Бәҙрәф эргәһендәге бүлмәгә килә.*

Бөгөн, ошонда ултыраһың. Бәҙрәф эргәһендә. Пожарник китмәйенсә башыңды сығараһы булма. Ишеттеңме?

**Егет.** Ярай...

*Егет меңкен киәфәттә инеп китә.*

*Күпмелер вакыттан һуң янғын һүндереүсе һәм уның артынан эйәргән хужа килеп сыға.*

**Янғын һүндереүсе.** Бөтә нәмә һәйбәт, бөтә нәмә урынында – улай булмай ул!

**Хужа.** Беҙ бөтәһен дә инструкция буйынса эшләнек. Янғын булмаһын тибеҙ.

**Янғын һүндереүсе.** Эвакуация планы ҡайҙа? Күрмәйем!..

**Хужа.** Алдығыҙҙа тора...

**Янғын һүндереүсе.** Ә огнетушителдәр?

**Хужа.** Артығыҙҙа, мөйөштә.

**Янғын һүндереүсе.** Ы-ны... Эшләйҙәрме?

**Хужа.** Эйе. Ике ай элек алмаштырҙыҡ.

**Янғын һүндереүсе.** Биркаларынмы? Яңы дата яҙҙығыҙмы?

**Хужа.** Юҡ, инструкция ҡушҡанса эшләнек.

**Янғын һүндереүсе.** Нимә инструкция ла инструкция һөйләйһең. Как будто, мин белмәйем! Әйт, яңы дата яҙып ҡуйҙыңмы?

**Хужа.** Юҡ...

**Янғын һүндереүсе.** Күҙегеҙ алдай!.. Тот папканы!.. Хәҙер...

*Папкаһын бирә лә, ике огнетушителдең береһен баш түбән әйләндерә һәм тотко-сон үҙенә тарта. Огнетушителдән атылып күбек сыға башлай. Быны көтмәгән янғын һүндереүсе күбекте усы менән каплап туктатмаксы итә. Күбек уға сәсрәй.*

Ярҙам ит!

**Хужа.** Нисек?

**Янғын һүндереүсе.** Ай, аңра... Ҡайҙа бәҙрәф?!

**Хужа.** Ана!..

*Янғын һүндереүсе күбек һиптергән огнетушителде тотоп, бәҙрәфкә йүгерә. Хужа артынан эйәреп килә.*

**Хужа.** Өҫтөгөҙҙө һөртөргә сепрәк алып киләм!..

*Хужа коридор буйлап икенсе якка елдерә.*

**Янғын һүндереүсе.** Ҡайҙа киттегеҙ?!. Ярҙам итегеҙ!..

*Шул сак эргәләге бүлмәнән баяғы егеттең башы күренә. Ул шунда ук асык бәҙрәф ишегенә башын тығып карай. Күрә, янғын һүндереүсе огнетушителдән унитаз яғына күбек һиптерә – нимәлер һүндерә.*

Тиҙерәк булығыҙ! Ярҙам итегеҙ!..

**Егет.** Хәҙер!..

Егет шунда уҡ йүгереп барып икенсе огнетушителде эләктерә, рычагты үҙенә тарта. Огнетушителдән күберәк күбек атыла башлай. Егет, шунда уҡ огнетушителе менән янғын һүндереүсе эргәһенә йәнәш баҫа һәм уға ҡушылып... унитазға күберәк һиптерә башлай.



**– Айыуға рәхәт, ауыр замандар килгәнен белмәй әле...**

– Медведю хорошо, ещё не знает что наступили тяжёлые времена...

**А. ВАСИЛОВ**







# Юғалған юл

***Һәнәк дуҫ! Һинең бармаған ерең, күрмәгән нәмәң юк. Ә бына беҙҙең Таш Ҡалмаш ауылына һис кенә лә килеп сыҡҡаның юк. Бәлки, быға үпкәләргә хаҡыбыҙ ҙа юҡтыр. Ауылыбыҙҙың исеме “таш” һүҙенән башланһа ла, беҙҙә уның еҫе лә, әҫәре лә юк. Шуға йәйге ямғырлы ваҡыттарҙа, яҙлыкөҙлө юлдың аҫты-өҫкә килеп, аҡтарылып ята. Бындай ваҡыттарҙа ауылыбыҙ урамдарына машина менән инермен тип уйлама ла. Ауылға килеүселәр машиналарын оло юл буйында ҡалдырып, үҙҙәре йәйәү тәпәйләргә мәжбүр. Ярай әле ҡыш етте. Ләкин беҙҙә бит һәр ваҡыт ҡыш булып ҡына тормай. Уның артынан яҙ ҙа етә. Шуға күрә, Һәнәк ағай, беҙгә килһәң, ҡыш килеп ҡал. Яҙын килер өсөн, моғайын, вертолётың да, самолётың да юҡтыр.***

**В. АЙҘАРОВ.**
Саҡмағош районы.

## ✦ Мәҙәк мәлдәр ☻☺☻☺

## Герой



*Вафа ағай «Беларусь» тракторында эшләгән Рәмил менән урманға утынға бара. Әрҙәнәләрҙе тейәп бөтөүгә, дауыллап йәшенле ямғыр яуа башлай. Былар тиҙ генә ауылға ҡарай һыпырта. Рәмил тракторын шул тиклем шәп ҡыуа – соҡорсаҡырҙарҙы ла ҡарап тормай. Ул-был булып ҡуймаһын тип хафаланған Вафа ағай:*

*– Ҡустым, әкренерәк бар. Юл насар бит. Ныҡ һелкетә, – ти.*

*Рәмил дә яуапһыҙ ҡалмай:*

*– Һи-и-и, ағай, беҙҙең кеүек егеттәргә соҡор ҙа, таш та, ағасы ла нипачум! – ти. – Тиҙерәк ҡайтырға кәрәк. Ташбаҡа кеүек шыуышып йөрөргә яратмайым.*

*– Шул-ай-ай, – ти Вафа ағай, һуҙып. – Бына нәк һинең кеүектәр Бөйөк Ватан һуғышында герой булғандар ҙа инде.*

*Ошонан һуң ауыл халҡы Рәмилгә «герой» тигән ҡушамат йәбештереп ҡуя.*

**Эльвира ӘХМӘҘИЕВА.**
Ҡыйғы районы, Йосоп ауылы.

## Кәфен абзый

*Эй төшөрөргә әүәҫ тә инде Әхләметдин абзый. Шуға ла аҙым һайын тигәндәй төрлө ҡыҙыҡлы ваҡиғаларға тарып ҡына тора. Үҙе менән булған мажараларҙы аҙаҡ башҡаларға килешле итеп һөйләүсен әйт әле. Барыһы ла уны ауыҙын асып тыңлай, эсен тырнап көлә.*

*Бер көндө шайтан һыуын мул ғына уртлаған Әхләметдин абзый өйөнә ҡайтып инеү менән оло һикегә ауа. Ҡатыны, өшөп ятмаһын тип, картының өҫтөнә юрған килтереп яба. Тегеләй-былай тулап йоҡлаған иҫерек юрған тышлығы эсенә инеп, уралып бөтә.*

*Инде бер тына йоҡлап уянған Әхләметдин үҙенең ап-аҡ тауар эсендә төрөлөп ятыуын күрә. «Былай булғас, бөттө, бынан котолоу әмәле юк, мин үлгәнмен дә кәфенгә төрөп ҡуйғандар», – тигән уй үтте баштан. Ярай әле, әбейем кәфен эсенән аралап сығарҙы», – тип һүҙен тамамлай Әхләметдин абзый.*

*Юктан ғына мәрәкә табырға, көлөргә яратҡан йәш-елкенсәккә был етә ҡала. Әхләметдинде «Кәфен абзый» тип кенә йөрөтә башлайҙар.*

**Миҙхәт ЗАРИПОВ.**
Саҡмағош районы,
Митрәй-Әйүп ауылы.

# СОҠОР

Хикәйә

Партия әһелдәрен ҡыуып тараҡтас, демократҡа әүерелгән Шәфиев әфәнде иң тәүге эше  итеп колхоз исемен “Хужабаш”ҡа әйләндерҙе. Әммә хужалыҡ ҙур уңыштарға ирешә алмағас, уны низҙер вәғәҙә иткән “Табышҡа “ үҙгәрттерҙе. Шуға ла яңы рәйес хужалыҡта эште яңыса башлап ебәрҙе. Сит илдән мул һөт биреүсе һыйырҙар ҡайтартты. Уларҙы юл буйындағы әлегә емерелмәй ҡалған ферманың биналарына урынлаштыртты. Был һәүкәштәр рәйестең өҙөлә башлаған өмөттәрен ялғаны: улар гөбөрләтеп биҙрә-биҙрә һөт бирә башланылар. Хужалыҡ кассаһына, бигерәк тә рәйес кеҫәһенә шығырлап торған аҡсалар аға башланы. Шуға ла мул табыш килтергән фермаmakeны артабан да хәлләндереү өсөн рәйес барыһын да эшләнө – силосҡа тип кукуруз биләмәләрен киңәйтте.

Әммә күҙ ҡараһы кеүек күргән ферманан ауылда ҡалған ҡарт-ҡоро малдарына төндәрен, кеше аяғы һил булғас, силосын-бесәнен ташып, йәненә тейҙе. Уның өҫтәүенә фермала эшләүселәр ҙә арба-саналарына  һалып, мал аҙығын урлауҙарын дауам  иттеләр. Шунда рәйестең башына бик зәһәр фекер килде: ферманы крепосҡа әйләндерергә! Был оло маҡсатҡа ялланған эшселәр ферма тирә-яғына экскаватор менән киңлеге лә, тәрәнлеге лә өс метр булған соҡор ҡаҙып сыҡтылар. Асфальт юлдан инеү өсөн генә дүрт-биш метрлыҡ ара ҡалдырылды, унда тимерҙән ҡапҡа ҡуйылды. Мал ҡараусылар, һауынсылар эшкә йәйәү килә, йәйәү ҡайтып китә башланылар.

Ферма, ысындан да, крепосҡа әүерелде.

Әммә төндәрен, ауыл яғынан килеп, ниндәйҙер яйын-әмәлен табып, мал аҙығын ташығандары һиҙелә ине рәйескә.

Ямғыр быҫҡаҡлап торған көҙгө бер кистә, эшселәр өйҙәренә таралып бөткәс, рәйес, ауыл яғынан ферманы бүлеп торған соҡор аша кемдер һалған таҡта аша ферма өйөнә уҙҙы.

Ҡарауылсы Хәйбуш мылтығын ҡосаҡлап, мейес эргәһендә әүен баҙарына киткән ине.  Шәфиев, уны уятып та тормайынса, мылтығын алды ла ферма биналарына йүнәлде. Унда  ул-был булмауына ышанғас, ҡайтыр юлына сыҡты. Үҙе әле генә сыҡҡан таҡта өҫтөндә силос ҡалдыҡтары күргәс, елле итеп бер һүгенде лә, тайғаҡ таҡтанан атланы. Был таҡта  центр ярымлы кәүҙәне күтәрә алманы. Шәфиев түбәнгә барып төштө.

Соҡор эсе яртылаш тейерлек шаҡшы һыу менән тулы ине. Рәйес был боламыҡты йырып, тегеләй-былай һуғылып ҡараны, әммә өскә үрмәләргә әмәле юҡ ине. Бик оҙаҡ йырып йөрөнө ул был араны. Шунда ул: “Әгәр  был әжәлдән ҡотолһам, был соҡорҙо күмдерәм, урлаһындар әйҙә, силосын да, башҡаһын да – колхоз байлығы быуа быуырлыҡ”, – тип ҡабат-ҡабат тәүбә итте.  Бер саҡ Шәфиев боламыҡ эсендәге бер ҡаты нәмәгә  барып төртөлгәс, эсенә бер аҙ йылы инде, әммә был ҡаты нәмә үлгән быҙау булып сыҡты. Шул саҡ юғарыла ферма  тирәһендә тиреҫкә кумелгән үләкһәләр менән туҡланыусы эт өйөрөнөң һау-һаулауы уның ҡолағын ярҙы.

Үҙенә табан йүнәлтелгән фонарь уты нөктәһе ярым-яртылаш һушынан яҙа башлаған Шәфиевте аңына килтерҙе һәм ул һуңғы көсөн йыйып, айға ҡарап олоған сүл береһе тауыштары сығарып: “Хәйбуш ағай, ҡотҡар, үләм бит!” – тип аҡырҙы. Мылтығын эҙләргә сыҡҡан Хәйбүш, ярым иҫерек булһа ла, эштең ниҙә икәнен самалап, йәһәт кенә баҫҡыс алып килеп, уны соҡорға төшөрҙө. Бысраҡҡа батҡан, ен ҡиәфәтенә ингән, дер-дер килеп торған рәйес, көс-хәл менән яҡтылыҡҡа үрмәләп, сығырға үҙендә көс тапты һәм ҡотҡарыусыға бер һүҙ әйтмәйенсә, автомобиле яғына ынғайланы.

Хужалыҡтың йәһәннәм төбөнә  әләгә яҙған рәйесе аҙна-ун көн өйөндә ятып, ҡырҡ градуслы “дарыу” менән дауаланғас, ниһайәт, ун көн тигәндә контораһында күренде. Беренсе эше итеп ул ялланыусылар эйәртеп, үҙенең мөһим “объект”ына – һыйыр фермаһына йүнәлде.

Килеү менән Шәфиев әфәнде үҙенә ҡәбер була яҙған ошо ҡәһәрле соҡорҙо бульдозер менән күмдерә лә башланы. Уның артынан уҡ егерме кешенән торған әҙер... бригадаһы өс метр бейеклектәге тимер-бетон ҡойманы ултырта ла башлағайнылар инде.

**Раил СӘЙЕТГӘРӘЕВ.**











# Дуҫтар күстәнәсе

**“CARICATURA.RU” интернет сайтынан.**










# ЙЫЛМАЙЫУСАН ЕГЕТ

## Камил ФАЗЛЫЙға – 60 йәш



Камил Фазлый – егет кеше. Шуға күрә, 60 йәше тулһа ла, сәсе апаҡ булһа ла, “бабай” тимәйбеҙ уға. Һәм, ғөмүмән, ул бер ҡасан да бабай булмаҫтыр һымаҡ. Һәр хәлдә беҙгә шулай тойола.

Һуң, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, ағайэне, ғүмер баҡый йылмайып йәшәгән кеше нишләп ҡартайып торһон, ти! Ундайҙар һәр саҡ егет булып ҡала. Тап бына Камил кеүек.

Йылмайыу кемгә лә килешә. Ә Камилға бигерәк тә. Сөнки ул юморист. Дөрөҫ, уны бер үк ваҡытта лирик та, сатирик та тип әйтеп булыр ине. Ләкин иң элек ул барыбер юморист. Шуға уның ижадында юмор өҫтөнлөк ала.

Ә инде былдай кешенең йылмаймайынса башҡа төрлө ҡиәфәттә йөрөүен күҙ алдына килтереүе лә мөмкин түгел. Ысын мәғәнәһендә йылмайыусан егет ул, Камил Фазлый. Әҫәрҙәре лә, үҙе төҫлө, йылмайып тора. Уларҙы уҡығас, авторҙың үҙен күргәндәй, йылмаяһы килә. Ихлас күңелдән.

Камил Фазлыйҙың матбуғатта сыҡҡан бөтә әҫәрен дә уҡып барабыҙ, тиһәк, һис арттырыу булмаҫ. Улай ғына түгел “Һәнәк”кә ебәргәндәрен ҡат-ҡат уҡып, уларға фатихабыҙҙы бирәбеҙ. Хәйер, ул яҙғанды әллә ни редакторлайһы ла юҡ. Кубеһе шул көйөнсә, бер ниндәй төҙәтеүһеҙ-ниһеҙ журналға инеп китә. Нисәмә йылдар буйына сатира-юмор өлкәһендә иң һыҙғанып эшләгән уңған авторыбыҙ инде ысын мәғәнәһендә профессионалға әүерелде. Уның яҙғандарын уҡыусылар ҙа, мөхәррирҙәр ҙә бер үк дәрәжәлә ярата.

Эйе, ул нисек яҙа белә. Һәм нимә яҙырға белә. Әллә ҡайҙан тема эҙләп ҡаңғырмай, ығы-зығылы тормоштоң көлкөһөн таба алмай ыҙаланмай, үҙе белгән, үҙе күргән нәмәләр хаҡында ғына ҡыҙыҡлы итеп яҙа ла ҡуя. Шуға ла уның яҙғандары яһалма түгел, ә үҙебеҙсә, тормошсан килеп сыға.

Камил ауылда йәшәй, шуға әҫәрҙәренән ауыл еҫе аңҡып тора. Ул уҡытыусы, шуға күберәк мәктәп хәлдәре тураһында яҙа.

Балтас районы Нөркә ауылында уҡытыусы булып эшләгән быНамын тигән авторыбыҙ бар ине. Юмористик хикәйәләр оҫтаһы Риф Мөхәмәтовты әйтәбеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн ул юҡ инде. Бәхетебеҙгә күрә, уның һымаҡ арымай-талмай сатира-юморыбыҙға хеҙмәт итеүсе Камилыбыҙ бар. Шуныһы ҡыуаныслы.

Бына һеҙҙең алдығыҙҙа юбилярҙың яңы әҫәрҙәре. Уҡығыҙ, дуҫтар. Уҡығыҙ ҙа көлөгөҙ. “Һәнәк”тең һәр саҡ йылмайып торған егете менән бергә көлөү күңелле!

**Мар СӘЛИМ.**

---

**Камил ФАЗЛЫЙ**

## Кем булырға?

Һөнәр һайлай студенттар
Вузды бөткәс кем булырға.
Береһе әйтә: – Уйлайым
Тәртип һағында торорға.

Аҡсаһы ла кәм-хур түгел,
Кем әйтмешләй, кейем байҙан.
Унан да яҡшы һөнәрҙе
Табаһың, – ти, – эҙләп ҡайҙан?!

Икенсеһе: – Алыпһатар
Булып китеү, – ти, – теләгем.
Бер тәңкәнән ун бер тәңкә
Яһау юлын да беләмен.

Өсөнсөһө: – Һатыусы, – ти, –
Кеҫәгә ҙур табыш бирә.
Үлсәү тотоп алдау эшен
Хуп күрәм, – ти, – шуға күрә.

Дүртенсеһе: – Төрлө хәлдәр
Тыуа һатыу юлдарында,
Ә бына, – ти, – бөтә аҡса
Баш бухгалтер ҡулдарында.



Һанап ҡына ултыраһың
Оло һумдар кергәнен, – ти, –
Кеҫәңә лә тамыҙаһың,
Бар ишетеп, күргәнем, – ти.

– Һөнәрҙең иң яйлыһы –
Адвокат, – ти бишенсеһе, –
Ғәйеплене – ғәйепһеҙ, тип
Аҡса йолҡа торған кеше.

Ана шулай студенттар,
Һөнәр һайлап, башын вата.
Ә үҙҙәре уҡытыусы
Һөнәренә... уҡып ята.

## Үс алыу

*(Тимер Арыҫланға эйәреп)*

Гәзиттәргә, журналдарға
Яҙылдым мин, уҡырмын тип.
Гәзит тә юҡ, журнал да юҡ –
Төп башына ултырҙым бит.

Почтальонға юл тотамын:
– Ниҙә, – тимен, – сәбәптәре?
– Райүҙәктә белеш, – ти был, –
Бар онотоу ғәҙәттәре.

– Ятма йоҡлап, осона сыҡ, –
Үҙ-үҙемде ҡоторттом мин.
Асфальт йылы, миңә рәхәт,
Райүҙәккә һыпырттым мин.

Элемтәнең етәксеһе
Мәсьәләне асты йәйеп:

– Исемлектән һыҙған һине –
Компьютерҙа бөтә ғәйеп.

Хәтеркәйе би-ик самалы,
Эт шикелле холҡо – насар.
Ен тартмаһы тиһәләр ҙә,
Ен дә үҙен ташлап ҡасыр.

– Күрмәгәнеңде күр, – тинем,
Матбуғаттан мәхрүм иттең! –
Ҡаршылағы компьютерҙың
Ҡорһағына тибеп киттем...

## Ғәҙеллек

Берәү бер көн бер мышыны
Ҡуш көбәктән атып алды.
Баш-тояғын ергә күмде,
Санаһына итен һалды.

Ошо хәлде егерь иптәш
Күреп ҡалды көтмәгәндә.
Йән асыуын сығарыр был,
Түҙһен генә атҡан бәндә.

– Үәт маладис, – тине егерь,
Арҡаһынан һөйөп, бик шат, –
Арт һандарҙы үҙ санаңдан
Алып, минекенә бушат.

Һунарыңды дауам ит, – ти, –
Мышы атҡас, күрешербеҙ.
Ғәҙеллекте яратам, – ти, –
Уныһын да бүлешербеҙ.

## Шәп йүнһеҙ

– Йүнһеҙ етәксе ҡуйҙылар,
Ҡайҙан тапҡандар үҙен?
Тәртәнән сыға башлаһаң,
Еткерә тәнҡит һүҙен.

Яңы технологиялар
Ҡулланып йәнгә тейә.
Үҙе башлы, уңған хайуан,
Һис тик тотмай – эш өйә.

– Элеккеһе ниндәй ине?
– Шәп, баш бармаҡ кеүек!
Бер һүҙ сыҡмаҫ ауыҙынан,
Гүйә, ҡуйғандар тегеп.

Ул етәксемде һағынып
Көн-төн аҡылдан яҙам.
Килһә – килде, килмәһә – юҡ,
Аңғыра ине, наҙан...



## Һорау

Аҡыллы ла кеүек былай үҙе,
Бер аҙ ғына әллә иҫәрме;
Юлда берәү минән һорап ҡуйҙы:
– Мәрхүм Шәрәф ағай иҫәнме?



## Тәнҡит

Йыйылышта һәр кем баҫып,
Һүҙ әйтергә ашыҡты:
– Бөтә белгәнең – ашау, – тип,
Тәнҡитләйҙәр... ҡашыҡты.

## Хафа

– Ниңә оҙон үҫтем икән,
Күрмәгәндәй, буйға мин гел?
Башым түшәмдән сыға, – тип,
Хафаланған гөбөргәйел.








## Хикмәте — хәрефтә

### Ослотауҙағы осрашыу

**Октябрь. Остан-осҡа осҡондар оса. Орҡояның ойотолған ойотҡанына ойоп, олатаһы одеялға ойпаланған. Ойотҡан ойой. Олатаһына оронсоҡламаҫҡа Орҡоя Ослотауға олаҡты. Осрашыуҙы ойоштороусы Оморҙаҡ – ООО-ла охранник. Орҡояның осһоҙло одеколонын Оморҙаҡ оҡшатты. Оморҙаҡ отошта отҡан оҙон ойоҡто оноҡҡайны. Осрашыуҙы олатайға ошаҡланылар, осто олатай Ослотауға, Орҡоя оҙаҡлаған.**

**Орҡоя:**

**– Ой-ой, олатай, Оморҙаҡтың организмында операция.**

**Олатай:**

**– Ох-ох, окаянный олатайыңа оҡшап... оккупант!**

**Оморҙаҡ:**

**– О-о-олатайым – оккупант?!**

**Олатай:**

**– Оронма Орҡояға! Оятһыҙ!**

**Олатайҙың орошоуы Оморҙаҡҡа оторо оҡшаманы.**

**Оморҙаҡ олатайҙың очкийын ослоташҡа онтаны ла олаҡты Оҙонтуғайға.**

**Олатай Орҡояға:**

**– Оялмайһыңмы? Олоно ололамаҫҡа оҫтарғанһың. Оялыуҙың остоғон да осратманым Оморҙаҡта. Оморҙаҡ – оккупант оноғо. Олатай орошто, Орҡоя олоно, Оморҙаҡ олаҡты.**

**Филүрә МОРАТШИНА.**
Әбйәлил районы,
Һәйетҡол ауылы.

Кирам Кәримович, подъезд ишеген асып, ашыҡмай ғына тышҡа сыҡты. Шофёры унық сығыуына баҫҡыс төбөнә үк килеп туҡтаны. Киң итеп ишеге асылған “Волга”ның алғы ултырғысына ултырғас, затлы сигарет ҡабыҙып, асыҡ тәҙрәнән төтөнөн тышҡа өрҙө. Машина ҡуҙғалып китеүгә Кирам Кәримовичтың күҙе балалар майҙансығындағы бер төркөм ирҙәргә төштө. Улар дүшәмбе көн иртән сәғәт һигеҙҙә үк йыйылышып, һыра эсеп ултыралар ине. “Эх, эшкә бараһы булмаһа, улар кеүек рәхәтләнеп һыра һемерергә! Миңә көн дә эшкә шул. Йәйелеп ултырып, иркенләп бер көрөшкә һыра эсә алмайса ғүмерем уҙа. Ул бик кәрәкле кеше шул – ял көнө тип тормайҙар юғарылағылар саҡырып ҡына тора. Эх-х-х, бер генә көрөшкә һыра эсергә...” – тип татлы уйҙарға бирелде ул.

Был уның беренсе генә уфтаныуы түгел ине.

Кирам Кәримович офиста эш бүлмәһенә барып, ғәҙәттәгесә йомшаҡ креслоһына сумып, киреләп ултырҙы. Унан хеҙмәткәрҙәрен йыйып, тиҙ генә кәңәшмә үткәрҙе. Бер аҙҙан эшлекле төҫ сығарып, күптәнге ғәҙәте буйынса компьютер экранына төбәлде. Теге йәки был йомош менән кергән урынбаҫарҙары, хеҙмәткәрҙәре менән ҡыҫҡа ғына һөйләште, бойороҡ бирҙе. Тегеләре “босс”тарының экранға төбәлеп ихлас эшләп ултырыуын күреп, артыҡ бимазаламаҫҡа, ваҡытын алмаҫҡа, тиҙерәк сығып китергә ашыҡты. Ә ул компьютерҙа... көнө буйы кәрт һуҡты. Ваҡыты-ваҡыты менән секретарынан сәй, төштән һуң кофе һораны. Уйнап күҙҙәре талғас, телефондан башта ҡатыны, унан һуң туғандары, дуҫ-иштәре менән иркенләп һөйләште. Ҡараһа, хеҙмәт көнө лә тамамланған икән. Эш барҙа ваҡыт бик тиҙ үтә бит ул...

Шулай Кирам Кәримович бына ун һигеҙ йылдан артыҡ “Тимербетон конструкциялар һәм изделиеларҙы тутығыуҙан һаҡлау баш идаралығының етенсе филиалының проектлау институтына ҡараған макулатураға тапшырылаһы документтар, мөһөр һуғылмаған

# ХЫЯЛ

**Юмореска**

бланкылар, эш һәм эшкә бөтөнләй ҡағылышы булмаған ваҡтөйәк башҡа ҡағыҙҙарҙы беренсе сиратта эшкәртеүгә тапшырыуҙы ойоштороу” асыҡ акционерҙар йәмғиәте коллективына етәкселек итә. Эш көйлө бара, СССР заманында уҡ яйға һалынған бит ул. Ил тарҡалғас, исеме генә үҙгәрҙе, дәрәҫәрәге – заманса һүҙҙәр өҫтәлде. Ул хәҙер ойошма етәксеһе түгел – президент; утыҙ йыл грузчик булып эшләгән мәңге иҫерек Вәли – йөктәрҙе транспортлау бүлеге менеджеры (ул утыҙ йыл нисек ҡағыҙҙарҙы ҡапсыҡҡа тултырып, елкәһенә һалып ташыһа, әле лә шулай эшләй); йыйыштырыусы Сәлимә апай – офисты тәртиптә тотоу һәм кәрзиндәрҙәге сүпте сорттарға айырыу буйынса менеджер... Тәк ышту хәҙер бында бер ҡара эшсе лә ҡалманы. Ләкин уйламаған ерҙән ниндәйҙер буш баштар арҡаһында донъяла иҡтисади кризис башланды. Был көрсөк тиҙҙән Кирам Кәримович йәшәгән ҡалаға ла килеп етте. Бер көндө онотолоп китеп компьютерҙа кәрт һуҡҡанда электрон почтанан хат килде. Хат баш идаралыҡтан һәм бик ҡыҫҡа, ләкин тәрән эстәлекле ине: “Финанс кризисы сәбәпле, һеҙҙең ойошма иртәгәнән бөтөрөлә. Бинаның ишеген бикләп, асҡысын бөгөн киске сәғәт һигеҙгә миңә килтерегеҙ. Коррозиев.” Шулай итеп, Кирам Кәримович һәм уның дүрт йөҙ кешелек берҙәм коллективы эшһеҙ ҡалды...

Ул бөгөн иртән ғәҙәттәгесә торҙо, йыуынды, ҡырынды, хуш еҫле ҡиммәтле хушбуйын һөртте. Аш бүлмәһенә ингәс аптырап ҡалды – өҫтәл буш ине, тимәк, иртәнге аш та юҡ. Шул ваҡыт, ауыҙын ҙур асып иҫнәп, ҡатыны күренде.

– Һин нимә, ҡайҙа йыйынның? Һиңә бит эшкә түгел! – Ҡатынының был һүҙҙәре уны күктән ергә төшөрҙө. Кирам Кәримовичҡа моңһоу булып китте. Ул тәҙрәнән ҡарап тышты күҙәтте. Уның күҙе теге балалар майҙансығына төштө. Әүәлгесә бер төркөм ирҙәр йыйылған. Кирам Кәримович ҡатыны һиҙгәнсе тиҙ генә кейенеп, улар янына йүгерҙе. Дүрт ир ҙур “балон”дан һыра һемерә ине.

– Һеҙҙең янға мөмкинме? – тине Кирам Кәримович ҡыйыуһыҙ ғына.

– Әлбиттә, мөмкин, – тип ирҙәр шаулашып, бер-беренә ҡарашып алды. Ҡырынмаған, ҡыҫҡа буйлыһы яҡыныраҡ килде.

– Беҙҙең һыра һәм башҡа ҡатыраҡ эсемлектәр һөйөүселәр коллективына ҡушылыу өсөн беренсе – ҡабул итеү взносың бармы һуң?

– Ғәфү итегеҙ, аңламаным...

– Шкаф кеүек таҙа кешеһең, ә антрисолең буш... – Уның был һүҙенән һуң төркөмдәгеләр шарҡылдап көлөргә тотондо. – Беҙгә ҡушылырға аҡсаң бармы, тим?

Кирам Кәримович кеҫәһендәге аҡсаһын бирҙе. Ҡырынмаған кеше аҡсаны һанағас:

– Что-то һин, брат, коллективҡа бик слабо ҡушылаһың, минеңсә, беренсе күрешеү, беренсе мәжлес ул йәшен атҡандағы кеүек иҫтә ҡалырлыҡ булырға тейеш, – тип һораулы ҡарашын Кирам Кәримовичҡа ташланы. Ҡатынынан йәшереп йыйғанды сығарырға тура килде.

Теге ир бер нисә минуттан кибеттән араҡы, һыра шешәләре күтәреп килеп тә етте. Стакандарға һыра, уның өҫтөнә араҡы һалдылар. Кирам Кәримович эсеп ебәрҙе, эсемлек бик тиҙ башына бәрҙе. Араҡы ҡушылған һыра тәмһеҙ, әсе ине. Шул ваҡыт ул, иртән иртүк “һыра эсергә ине”, тип татлы уйҙарға биреләүен иҫенә төшөрҙө. Эх, ҡайһы ваҡыт теләктәрҙең ҡабул булыуы, хыялдың ысынға ашыуы тураһында уй башына килмәгән бит... Ул, күңеле тулып, илап ебәрҙе: шатлыҡтанмы, әллә ҡайғынанмы – һыра эсеүсе ирҙәр быны аңламаны.

**Фәнүз ХӘБИБУЛЛИН.**






# Тапҡырҙар ТУРНИРЫ



**Дөрөҫөн әйтәбеҙ: был юлы ла «Тапҡырҙар турниры»на килгән яуаптар һөйөндөрҙө беҙҙе. Уларҙың һәр береһе күңелгә ятышлы, күңелле, фәһемле булып сыҡты.**

Ҡыҙыҡлы әҫәрҙәре менән танылыу алған Әбйәлил егете Иҙрис Ноғоманов бөтәһенән дә өлгөр – иң беренсе булып уның «күгәрсен»е тәҙрә шаҡыны:

**Етмәгәс пенсияң, ҡала икән,**
**Шабашкыға ҡарҙар көрәйһе.**
**Тире тунмы алып кейергә**
**Аҡса төртмәҫме, тим**
**берәйһе.**

Дөрөҫ әйтә автор. Илебеҙҙә пенсионерҙарҙың көнитмеше еңелдән түгел. Уҙа барһа өсдүрт мең һум аҡсаны барыһына һуҙып ҡара әле. Ашарға еткерергәме, башҡа кәрәк-ярәкҡамы?

Туғандаш Татарстанда ла беҙҙең журналды алдырып уҡыусылар булыуына нисек ҡыуанмайһың! Борис Христофоров атлы уҙаман беҙҙең даими автор. Ул бына нимә, ти:

**Урам ситендә йөрөйөм,**
**Ҡарҙар яуһа көрәйөм.**
**Беҙҙе коммуналка талай,**
**Шуға шәрә йөрөйөм.**

Мәләүез районынан Шәкир Сәфәрғоловтың да яуабы үҙенсәлекле генә:

**Алыпһатар машинаһы**
**Ниндәй матур кейенгән.**
**Ә был бахыр пенсияһы**
**Артҡанына һөйөнгән.**

**Ҡыуаныстан сығып көрәй**
**Урамдағы ҡарҙарҙы.**
**Эй, Хоҙайым, ярҙам итсе**
**Арттырмаҫҡа хаҡтарҙы.**

Баймаҡтан Фәрит Әбүбәкеров бер атыуҙа ике ҡуян тотмаҡсы:

**Файҙалы эш бара бында –**
**Настоящий сынығыу!**
**Ары торһон Ивановса**
**Һалҡын һыуҙа ҡойоноу.**

Ошондай зирәктәргә афариндан башҡа нимә әйтәһең инде?

Ҡыйғынан Илһам Латиповтың уңғанлығына хайран ҡалдыҡ. Бер юлы ун ике яуап ебәргән. Ни арала өлгөрә тиң! Илһам баш ҡала кешеләренән көнләшкән дә һымаҡ:

**Өфөлә генә йәшәйҙер**
**Былдай кешеләр...**
**Булһын ине Алағуҙа**
**Шундай күршеләр!**

Был яуапты уҡығас, әллә Алағуҙ халҡы урамындағы ҡарҙы көрәргә лә йыбанамы икән тигән шик уяна.

Баймаҡ районынан Рәмилә Хәсәнова бабайын аҡса эшләргә өндәй:

**Әйҙә, бабай, тот көрәгең,**
**Киттек беҙҙең баҡсаға.**
**Өҫтөңә кейем алырһың**
**Ҡар көрәгән аҡсаға!**

Хәйбулланан Фәрит Торомтаев, Әбйәлилдән Миләүшә Әхмәтйәнова, Рәсимә Яхина, Аҫҡындан Хәмзә Хафизов, Ғафуриҙан Рәфис Байбулдин, Баймаҡтан Йәнбулат Байраҡаев, Күгәрсендән Закир Ҡолтаевтың да яуаптары ҡыҙыҡлы ғына.

**Барығыҙҙың да киләсәктә лә йылмайып-көлөп йәшәүен теләп һеҙгә, шаян дуҫтар, яңы һүрәт тәҡдим итәбеҙ Уйлағыҙ-уйнағыҙ!**






## Ике иғлан

- Китап магазинына ойоҡбаш, эске кейемдәр һатыусыһы кәрәк.
- Бер аҙна элек ауыл магазинына бурҙар төштө. Улар ун кило кишер һәм ете блок тәмәке урлаған. Милиция хеҙмәткәрҙәре көслә йүткереү менән яфаланған ҡуяндарҙы эҙләй. Күреүселәр булһа, участковыйға хәбәр итегеҙ.

# Көлгәнгә – көлкә

☺☹☺

Элекке заманда, техника һирәк кенә күренә башлаған осорҙа, ауылға трактор алып ҡайталар. Шуны күрергә тип ауыл халҡы йыйылып китә. Бер егет менеп ултырыуға трактор урынынан ҡуҙғалып та китә.

– Һи, юҡҡа ғына уҡып йөрөгән. Бараһың да ултыраһың да китәһең икән, – тип ауыл халҡы таралышҡан да ҡуйған.

☺☹☺

Ҡала театрында электр яҡтыһында спектаклдәр ҡуйыу башланған ваҡытта Өфөлә булған хәл. Ике бажа театр ҡарарға киләләр. Бына бер саҡ залдағы лампа уттары әкрен генә һүнә башлай. Бер бажа икенсеһенән:

– Ә бында уттар нисек улай яйлап ҡына һүнәләр икән? – тип һорай.

– Бәй, – ти икенсеһе бажаһының наҙанлығына аптырап, – киномеханик килеп инә лә розетканан вилка тигән нәмәһен әкре-е-е-н генә тартып ала башлай. Шул ыңғайға яйлап ҡына ут һүнә.

– Шулай тип уйлағайным да, – ти бажаһы ла, белгәненә ишара яһап.



☺☹☺

Балалары, хатта ейән-ейәнсәрҙәре лә бөтә тормош-яҙмыштарын театр менән бәйләгән ике оло йәштәге артисткаларҙың береһе:

– Һин ишеттеңме, беҙҙең Айгөл кейәүгә сыҡты бит! – ти.

– Кемгә? Режиссер Абдрахмановҡамы?

– Юҡ.

– Драматург Нәғимовҡалыр?

– Юҡ.

– Анау осветитель булып йөрөгән Хәйригәме әллә?

– Юҡ, уға ла түгел.

– Нисек?! Тамашасыларыбыҙ араһынан берәй йүнле кеше булһа ярай ҙа бит. Театрҙы белмәгән ғаилә менән нисек аралашмаҡсы булаһығыҙ?

☺☹☺

Театрҙа яңы эш башлаған йәш артист репетиция бөткәс, режиссер янына килеп шулай ти:

– Ғәфү итегеҙ, был драманың тәүге актында, монолог бөткәс, мин ҡырлы стакан тулы араҡыны бөткәнсә эсергә тейеш буламмы?

– Нимә, араҡы эскәнем юҡ, тимәксеһеңме? – тип йылмая режиссер.

– Бар, әлбиттә, тик егерме минут та үтмәҫтән, икенсе актҡа ап-айныҡ килеп сығырға тейешмен. Миңә нимә эшләргә?

– Ап-айныҡ кеше булып уйнарға тейешһең. Ә быны ң өсөн талант кәрәк!

☺☹☺

Театрҙа премьера бара. Тик алда ултырған иргә артҡы рәттән ике ҡатындың һөйләшкәне ҡамасаулағас, ул быларға:

– Ғәфү итегеҙ, – ти, – миңә бер һүҙ ҙә ишетелмәй.

– Ниндәй нахал ир был! – тип аптырай ҡатындар. – Беҙ һөйләгән һүҙҙәрҙә һеҙҙең эшегеҙ булмаһын!

Р. СӘНҒӘТЙӘНОВ.

**Хөрмәтле уҡыусылар!**

Белеүегеҙсә, бөтә нәмәгә лә хаҡтар артып тора. Матбуғат сараларына яҙылыу хаҡтарының быйыл да артыуы ихтимал. Ә шулай ҙа 31 мартҡа тиклем 2009 йылдың икенсе ярты йыллығына "ҺӘНӘК"кә элекке хаҡтар менән яҙылып ҡалырға мөмкин. Шуға күрә почта бүлексәләренә ашығығыҙ, хөрмәтле дуҫтар!

**"ҺӘНӘК"тән айырылмағыҙ, бергә булайыҡ, бергә көләйек!**

Журналдың индексы – 73456.


ҺӘНӘК
№ 2(1197)

ISSN 0208–094X

"ХЭНЭК" ("ВИЛЫ")
Ежемесячный журнал сатиры и юмора на башкирском языке.
Издается с сентября 1925 г.

Журналды ойоштороусылар:
Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте.

Адрес редакции: 450079, г. Уфа, ул 50-летия Октября, 13, "Хэнэк" ("Вилы").
Телефондар:
Баш мөхәррир 272-91-02
Баш мөхәррир урынбаҫары 272-52-82
Бүлектәр 272-87-43, 272-52-82

Подписка на журнал принимается без ограничений на всей территории страны.

Беҙҙең сайт: henek.pressarb.ru
Индекс 73456

Мәҡәләләрҙә килтерелгән факттарҙың дөрөҫлөгө өсөн уларҙың авторҙары яуаплы.

Баш мөхәррир Марсель СӘЛИМОВ

Мөхәрририәт һәм редакция советы:
Александр АНДРЕЕВ (бирәлеш бүлеге мөхәррире), Венер ИСХАҠОВ (өлкән мөхәррир), Риф МИФТАХОВ (әҙәбиәт бүлеге мөхәррире), Марат ӘМИНЕВ (яуаплы сәркәтип), Хәлил ӘХТӘМОВ (баш мөхәррир урынбаҫары), Артур ВАСИЛОВ, Мансаф ГИЛӘЖЕВ, Марат КӘРИМОВ, Рәсих ХАННАНОВ, Венера ХӘКИМОВА, Марат ӘБДҮШЕВ.

Сдано в набор 11.01.09. Подписано к печати 11.02.09. Офсетная печать. Усл.-печ.л. 2. Уч.-изд. л. 3,56. Формат 70х100 1/16. Зак. № 11. Тираж 3859.

Корректор З. МАЗҺАРОВА

Журнал зарегистрирован в Министерстве печати и массовой информации РБ. Свидетельство о регистрации № 687 от 15.12.1995 г.

Цена в розницу свободная.


©"ҺӘНӘК", 2009


Отпечатано в типографии ГУП "Издательство "БАШКОРТОСТАН".




**Горизонталь буйынса:** 2. Салауат Юлаевтың Пугачёв армияһындағы дәрәжәһе. 6. Мина йылымы. 7. Беҙҙеңсә "банзай". 8. Батыусы караптан радиограмма. 9. Музыкаль байраҡ. 10. Атырға өйрәнеү урыны. 12. Кавалеристың иң күп әйткән һүҙе. 13. Боронғо Рәсәйҙә ер сиктәре. 14. Оборона ҡоролмаһы. 15. 1-се фото. 21. Швейктың әҙәби атаһы. 22. Америка армияһының юғары штабы. 23. Караптағы арҡан. 25. Диңгеҙсенең баҫҡысы. 28. Шиғри ҡалып. 29. Батша заманындағы орден. 30. Муштра майҙансығы. 32. СС штурмбанфюреры дәрәжәһенә күтәрелгән совет полковнигы. 34. Граф Монте Кристоның төрмәһе. 35. Данлыҡлы ҡамыш кәмә. 36. Менделеев таблицаһындағы һирәк металл. 37. Германияла етештерелгән автомобиль. 39. Виртуоз осоусы. 41. Рәсәй пистолеты. 42. Мәскәү гәзите. 43. Х. Амин һарайын штурмлаған махсус отряд.

**Вертикаль буйынса:** 1. Боронғо Греция математигы. 2. Бүрәнә түшәмле землянка. 3. Ҡанатлы пехота. 4. Ҡыҙыл Майҙанға самолёт менән килеп төшкән немец осоусыһы. 5. Еңеүсенең башындағы аш тәмләткес. 11. Фатир алып, бурысҡа батыу. 16. Хәрби йөк машинаһы. 17. Патрондарҙың мылтыҡ эсендәге ояһы. 18. Фашистарҙың шпион самолёты. 19. Баҫыу ташы. 20. Караптағы салага. 24. 2-се фото. 26. Электр яйланмаһы. 27. Милитаризм сәйәсәтен инҡар итеүсе. 28. Башҡортостандағы курорт. 31. Йәһүдтәрҙең рәсми теле. 33. Яһалма мәмерйә. 38. Герман армияһының еңелмәҫлеге тураһындағы уйҙырма. 40. Муса Гәрәевтың штурмовигы.

**Хәлил ӘХТӘМОВ төҙөнө.**

## 1-се һанда баҫылған кәләсворд яуаптары

**Горизонталь буйынса:** 1. Чезет. 4. Логика. 7. Марк. 8. Ромб. 9. Хаки. 10. Скат. 14. Лампас. 18. Райкин. 19. Турнир. 20. Иматра. 23. Фтор. 24. Ром. 25. Морс. 27. Табу. 29. Конери. 32. Метро. 34. Фарватер. 35. Актёр.

**Вертикаль буйынса:** 2. Ералаш. 3. Евклид. 5. Герасим. 6. Камбала. 11. Ирбит. 12. Айран. 13. Либретто. 15. Амур. 16. Пеня. 17. Сюрреализм. 21. Ярус. 22. Коба. 25. Му. 26. Рио. 27. Тамға. 28. Батут. 29. Кофр. 30. Норд. 31. Реал. 33. Фен.